ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

2-8 ноябрь (ҡырпағай) 2019

№44 (878)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

**Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ әлеге ваҡытта 2020 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индексы "Киске Өфө" гәзитенә 676 һум 02 тингә яҙыла ала. Гәзиткә яҙылыу тураһындағы мәғлүмәтте таныштарығыҙға, әйләнә-тирәләгеләрегеҙгә лә еткерһәгеҙ ине.**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Өңрәйгән өй урындары...**



3

**Хөкүмәт яңырҙы**



4

**Егеттәр ҙә, ҡыҙҙар ҙа...**



сит яҡтарға китмәһен! 8-9

**Тайыштабан тураһында...**

ысынбарлыҡ



12

**ТВ-программа** 14


*МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ*

# АҠ ҠАҒЫҘ БИТЕНӘН УҠЫ!

**Быйыл йәй бал ҡорттары күпләп үлеүе тураһындағы хәбәрҙе ишетеп, геү килдек. Әле тегендә, әле бында тәбиғәт ҡазалары булып тора - уларына ла бот сабып аптырайбыҙ, ҡурҡып төшәбеҙ хатта. Был ҡаза-һәләкәттәрҙең барыһын да ахырызаман яҡынлашыуына һылтайбыҙ хатта. Әммә уларҙың күбеһе кешенең үҙ ғәйебе, үҙ ҡулдары менән эшләнеүен иҫәпкә алғанда, былар ахырызаман билдәһе түгелдер әле, тип фараз итергә урын бар.**

Мәҫәлән... Урман фонды биләмәһендә 2019 йылдың 13 апреленән 16 августына тиклем дөйөм майҙаны 1965 гектарҙа 146 урман янғыны теркәлгән, шуларҙың 50-һе - йәшендән сыҡҡан, ҡалғандарына халыҡтың ут менән һаҡһыҙ эш итеүе сәбәпсе. Кеше ҡулдары, кеше битарафлығы һөҙөмтәһендә килеп тыуған ошондай тәбиғәт һәм көнкүреш һәләкәттәре тураһында һөйләп, осона сығырлыҡ түгел, әлбиттә. Ә бына был миҫалды телгә алып китергә булыр: күптән түгел БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының статистика мәғлүмәттәрен иғлан иттеләр. Башҡортостанда 17 йәшкә тиклемге балаларҙы профилактик тикшереүҙең беренсе этабынан һуң (626 мең самаһы бала тикшерелгән) уларҙың ни бары 24,4 процентты ғына тулыһынса һау-сәләмәт тип табылыуы, башҡаларында ниндәй ҙә булһа тайпылыш күҙәтелеүе, республикала инвалид балаларҙың һаны 16 мең самаһына етеүе (уртаса бер район халҡы күләме) тураһындағы хәбәр уны ишеткән һәр кемде шаңҡытҡандыр. Бында кем, нимә ғәйепле? Эйе, беҙ бындай хәлдәрҙә медицина хеҙмәткәрҙәрен ғәйепләп өйрәнгәнбеҙ инде ул. Әммә... Әле күптән түгел бер йөклө ҡатын бала табыу йортонда дауаланып сыҡты. Аҙаҡ ул: "Оҙаҡ ятырға түҙемлегем етмәне, тиҙерәк сығып китеү яғын ҡараным. Йөклө йәш ҡатын-ҡыҙҙарҙың тәмәке тартыу урыны эҙләп, дауахана буйлап сабып йөрөүҙәренә, палатаға тәмәке еҫе борҡотоп килеп инеүҙәренә, үҙ-ара төрлө анекдот-ғәйбәт һөйләүҙәренә ҡарап, нисек түҙеп ятмаҡ кәрәк!" - тип һөйләне. Был бар ҡатын-ҡыҙҙарға ла ғәйеп тағыу түгел, ләкин... Ҡала урамдарында тәмәке борҡотоп, балаһын коляскала бәүетеп йә етәккә алып йөрөп ятҡан әсәйҙәрҙе күреп, аҙ әрнейбеҙме ни?.. Ә инде бындай әсәйҙәрҙең ауыл ерҙәрендә лә күренгеләп ҡалыуы, ғөмүмән, ғәҙәттән тыш хәл һымаҡ ҡабул ителә. Тәмәке тартҡан, алкоголле эсемлек менән мауыҡҡан әсәйҙәрҙән тыуған балалар әлеге ауырыуҙар исемлеген тулыландыралыр ҙа инде. Унан һуң, БР һаулыҡ һаҡлау министры Максим Забелин белдереүенсә, әсәйҙәренең зарарлы ҡылыҡтары арҡаһында ваҡытынан алда тыуған балалар һаны ла артҡан һәм, мәғлүм булыуынса, улар шулай уҡ инвалидтар иҫәбен арттыра...

**(Дауамы 2-се биттә).**




*АФАРИН!*

# БЫЛ БАЛАЛАР -

## өй һәм гимназия йәме




**Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы ойошторолған бихисап саралар араһында иң тантаналы һәм әһәмиәтлеһен билдәләргә булһа, нәҡ М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһының иң алдынғы уҡыусыларын тәбрикләү кисәһен атарҙар ине, моғайын. Сөнки бында һәр кескәй йөрәктә шағир рухы, һәр кемдең күңелендә уның йор һүҙе, тормош фәлсәфәһе урын тапҡан. Бына ошондай матур мөхиттә тәрбиәләнгән һәм белем алған балалар төрлө өлкәләрҙә өлгәшкән еңеүҙәре өсөн юғары баһаға - Мостай Кәрим исемендәге фонд грантына лайыҡ булды.**

Иң тәү булып сәхнәгә күтәрелгән Дәүләт Ғәйнуллин бихисап олимпиада һәм спорт ярыштары еңеүсеһе, "Хәүефһеҙлек мәктәбе" ирекмәне һәм хатта "Хәүефһеҙлек мәктәбе отличнигы" билдәһе менән дә бүләкләнгән. Уҡыуҙа ла, спортта ла алдынғы һәм шул уҡ ваҡытта Нариман Сабитов исемендәге музыка мәктәбендә яҡшы өлгәшкән Аделя Егорова, хәрби дан музейының алыштырғыһыҙ экскурсоводы булған Ислам Зөлҡәрнәев, ғилми-ғәмәли конференциялар еңеүсеһе Зарина Сәитғәлина, ҡала кимәлендәге конкурстарҙа призлы урындар яулаған Зәйнәп Ғәлимова, һәр яҡлап үҫешкән һәм уңыштары менән ҡыуандырған Наҙгөл Әхмәтшина, беренсе синыфтан тик "бишле"гә өлгәшкән Дамир Вәлиев, гимназияның президенты булып һайланған Ренат Ибраһимов, гимназияның барлыҡ сараларында әүҙем ҡатнашҡан Марина Ҡолбахтина һәм теүәл фәндәр буйынса олимпиадалар призеры Асман Ҡарағолов та лайыҡлы бүләктәрен алып ҡыуанды. Грант сертификаттарын уҡыусыларға шағирҙың ҡыҙы һәм М. Кәрим исемендәге фонд директоры Әлфиә Кәримова үҙе тапшырҙы.

**(Дауамы 2-се биттә).**

12+

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ЭШ ЮҠ ТҮГЕЛ,

## халыҡ ялҡаулана бара

**Ауыл биләмәһе башлығы булараҡ, ауылдар яҙмышы борсоуға һала мине. Бындағы проблемалар төрлө өлкәләргә ҡағылышлы булып тойолһа ла, улар барыһы ла бер-береһе менән тығыҙ бәйле һәм дөйөм хәл итеүҙе талап итә. Бер юҫыҡтағы мәсьәләләр буйынса ғына эшләп, икенсеһен иғтибарһыҙ ҡалдырырға ярамай ҙа, мөмкин дә түгел.**

Мәҫәлән, ауыл халҡының эш менән тәьмин ителеше, ҡала еренә күсеп китеүе, демографик хәл, экология, йәштәрҙең хеҙмәт тәрбиәһе, милли баҫма матбуғаттың үҫеше тәү ҡарамаҡҡа төрлө өлкәгә ҡараған кеүек мәсьәләләр, ысынында, улар бер-береһе менән бик тығыҙ бәйләнгән. Бөгөнгө заманда бөтәһе лә, ауыл ерендә эш юҡ, тип бара бит инде. Беҙҙең Үтәгол ауылы биләмәһендә дүрт эре ферма эшләй, хужалары эш хаҡы түләргә әҙерҙәр, тик эшләргә теләүсе генә табылмай. Эш юҡ түгел, халыҡ ялҡаулана бара. Ҡала ерендә уңайлы шарттарҙа йәшәргә, еңел-елпе эшләп, күп аҡса алырға хыяллана йәштәр. Себергә вахта менән эшләргә китеүҙәре еңел аҡса эҙләүҙән булмаһа ла, был хәл ир-аттарҙың иҡенсе бер һыҙатына - рухи көсһеҙләнеүенә бәйле.

Ауыл ир-егеттәренең бына ошо үҙен ҡулға алыуҙан һәм иҡенә яуаплылыҡ һалыныуҙан ҡасыуы илдәге тыуым-үлем хәлдәренә лә ҙур йоғонто яһай. Сөнки һәр ауылда кәм тигәндә егерме йәш кеше кәләш алмай, ғаилә ҡороп, үҙ донъяһын төҙөмәй йәшәп ята. Шуға ла тәү сиратта малайҙарҙы бәләкәйҙән яуаплы булырға өйрәтеп, ауыл балаларында крәҫтиән эшенә хөрмәт һәм һөйөү тәрбиәләп үҫтерергә кәрәк. Совет заманында үҙ һөнәренең оҫтаһы булған кешене онытып китеүсе юҡ ине. Хәҙер ауыл халҡы эшле кеше итеп күрә инек бит, бына шул ынғай күренеште кире тергеҙеү ҙә яҡшы булыр ине. Юғиһә, бөгөн ҡала ерендә йәшәп, эшләп, аҡса тапҡан кешене генә тормошта уңыш ҡаҙанған тип иҫәпләү бар. Ә ауылда ауыр хеҙмәттә тир түгеп, үҙ көсө менән донъя төҙөп йәшәүсе - уңышлы түгелме?

Тағы ла мине иң борсоғаны - экология. Тәбиғәт кешеһеҙ йәшәй ала, кеше тәбиғәтһеҙ йәшәй алмай, тиҙәр бит әле. Һаҡһыҙ мөнәсәбәт арҡаһында әле үк тәбиғәттәге үҙгәрештәрҙе тоябыҙ: һыулар йылғаларыбыҙ, һулар һауабыҙ бысранып тора. Һәр йылға бәләкәй генә инештән башланған кеүек, төйәгебеҙҙәге экологик хәлде яҡшыртыу ҙа ваҡтан - һәр кешенең үҙе артынан сүп-сарын йыйыуҙан башланырға тейеш, минеңсә. Был йәһәттән һуңғы арала беҙҙә бик күп эштәр атҡарыла: шишмә буйҙары таҙартып кәртәләнә, ауыл эргәһендәге сүплектәр бөтөрөлә, йәш ағас үҫентеләре ултыртыла. Халыҡ тирә-яҡты сүп-сарҙан таҙартыу өмәләренә дәррәү сыға, шуныһы ҡыуандыра. Уйлап ҡараһаң, бына ошо сүп-сар мәсьәләһе лә кешенең ниндәй тәрбиә алыуына ҡайтып ҡала бит. Бала саҡтан яуаплылыҡ тойоп үҫкән, тәртипле кешенең, тәбиғәткә зыян килтеререн белә тороп, ҡайҙа етте шунда ҡыйышлап йөрөмәҫе билдәле. Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, һәр милләттәш иңендә оло яуаплылыҡ ятыуын тойоп йәшәһен. Шул осраҡта ғына бөгөнгө заманда борсоған ауыр мәсьәләләрҙе хәл итеү юлдары табылыр.

**Сабит ФАЗЛЫЕВ,**
**БР Яҙыусылар Союзы ағзаһы,**
**Ейәнсура районы Үтәгол ауылы биләмәһе башлығы.**

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

# АҠ ҠАҒЫҘ БИТЕНӘН УҠЫ!

(Башы 1-се биттә).

Был миҫалдар тураһында һүҙ араһында, йән әрнеүенән генә әйтеп киттем. Әйтергә теләгәнем икенсе ине. Халыҡтың китап-гәзит уҡымай башлауын да шундай уҡ әле телгә алған ҡазаға, хафаға, ахырызаман билдәһенә япһарып булмаймы ни? Ғәжәп хәл бит был! Әле 25 йылдар элек кенә һәр ауыл йортонда, ҡала фатирында бөрәр генә булһа ла гәзит йә журнал алдырһалар, уҡымай тора алмаһалар, хәҙер ундайҙар бармаҡ менән генә һанарлыҡ ҡалып бара. Башҡорт һәм башҡа милли телдәрҙәге генә түгел, рус телендәге баҫмалар ҙа йылданйыл үҙ уҡыусыларын юғалтып, тираждарын кәметә. Мин үҙем халыҡ араһында күп йөрөгән, күп осрашыуҙар үткәргән журналист булараҡ, уҡымауҙың эҙемтәләрен нескәлы тоям: уҡыуҙан туҡтағандар мәғлүмәтһеҙлектән бигерәк, ябай ғына хәл-күренештәр тураһында ла фекер төйнәй, анализ-һығымта яһай алмай, һиненә хәбәрендә аптырап ҡабул итә һәм "Уҡымаңыҙмы ни, был турала "Киске Өфө"лә яҙғайныҡ бит", тигән төбәлеүҙәр яуапһыҙ ҡала. Хәйер, был турала, йәмғиәттең наҙанлана барыуы хаҡында, бөгөн бар тарафта сан ҡағыла икәнен беләһегеҙҙер инде. Тимәк, интернет селтәрендә онотолоп китеп ултырыу әле белемле булыуҙы аңлатмай...

Ошо урында, "Аҡ ҡағыҙ битенән уҡырға кәрәк, йәмәғәт!" тип өндәшке килә тағы ла.

**"Мәғлүмәтле кеше донъя менән идара итә" тигән хәҡиҡәтте күҙҙә тотоп, бар өлкәлә - заман ағышында, сәйәсәттә, иҡтисадта, социаль һәм мәҙәни өлкәлә мәғлүмәтлелектә артта ҡалмаҫ өсөн; аҡыл һәм белем туплар, дөрөҫ һөйләшер, дөрөҫ уйлар, уңышҡа өлгәшер, тарихи тамырҙарыңды нығытыр белер, бөтөн һорауҙарыңа яуап табыу өсөн уҡырға кәрәк.**

Һәм тағы бер сәбәп: немец геронтология һәм гериатрия йәмғиәте ғалимдары йәшләкте, хәтерҙе һәм теүәл аҡылды һаҡлар өсөн көн дә... бер генә бит булһа ла китап йәки гәзит уҡырға кәрәк, ти. Ғалимдар аңлатыуынса, аҡ ҡағыҙҙан хәрефтәр сүпләү мөләндә организмдағы ике нейрон араһында, йә нейрон менән икенсе бер күҙәнәк араһында бәйләнеш барлыҡҡа килә, бына шул бәйләнеш кешенең хәтере яҡшырыуға, башты эшләтеүгә, хатта йәш көйөнсә һаҡланыуға булышлыҡ итә икән. Кеше китап уҡығанда әҫәрҙәге ваҡиғалар, геройҙар өсөн борсола, шатлана, шул ваҡытта мейе әүҙемлеге күтәрелә. Йәғни, интернеттан түгел, ә аҡ ҡағыҙҙан уҡығанда беҙҙең мейе лә, тойғолар сығанағы булған йөрәк тә күнекмәләр яһай булып сыға...

**Әйткәндәй, аҡ ҡағыҙ битенән уҡымауҙың кире эҙемтәләре хаҡындағы ошо мәғлүмәттәрҙе элек тә еткергәнем булды уҡыусыларыбыҙҙың иғтибарына. Әгәр ҙә бөгөн гәзитебеҙ тиражы элеккегә ҡарағанда аҙыраҡ икән, тимәк, уҡыусыларыбыҙ исемлегенән төшөп ҡалғандар был мәғлүмәтте ҡолағына элмәгән. Ярай ҙа, беҙҙең баҫманы өнәмәй, башҡорт телендә сыҡҡан башҡа гәзиткә йә журналға китһәләр. Юҡтыр шул, сөнки бөгөн бар баҫмаларҙың да тиражы кәмене...**

**Шулай итеп, кешелек аҡ ҡағыҙ битенән уҡыу ғәҙәтенән төңөлә бара. Йәл, бик йәл...**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

АФАРИН!

# БЫЛ БАЛАЛАР -

## өй һәм гимназия йәме



(Башы 1-се биттә).

Ул бер тиҫтә уҡыусыны ғына бүләкләп ҡалманы, гимназия музейына ла бик ҡиммәтле һәм иҫтәлекле бүләктәр тапшырҙы. Улар араһында шағирҙың ейәндәре өсөн тип үҙ ҡулдары менән эшләгән ян һәм уҡтар, бүләк аттарының йүгәндәре, ҡамсыһы һәм шағирҙың ташҡа уйылған портреты, яңы нәшер ителгән китаптары бар ине.

Ә байрам аҙағында тәбрикләнеүселәрҙең үҙҙәренә һүҙ бирелде һәм улар Мостай Кәрим шиғырҙарын башҡорт һәм урыҫ телдәрендә һөйләп ишеттерҙе. "Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!" шиғырын яттан һөйләгән Дамир Вәлиев, тап ошо шиғырҙа Мостафа Сафа улының тарихы һәм характеры сағыла, тип иҫәпләй. Ә бына Асман Ҡарағолов шағирҙың ижадын яңы үрҙәр яуларға илһамландырып торғаны өсөн үҙ итә. "Тәүге тапҡыр грант алдым һәм был көн минең өсөн бик әһәмиәтле. Сөнки шундай дәрәжәле баһаға лайыҡ булыуыма шатмын, көтмәгәйнем. Грантты нимәгә сарыф итеремде белмәйем, әммә әсәйем берәй ҡайҙа сәйәхәткә ебәрәм тине. Рәсәй сиктәренән тыш бер ҡайҙа ла булғаным юҡ, Төркиәгә барыр инем. "Великолепный век" сериалы төшөрөлгән ерҙәрҙе күргем килә", - тип тәьҫораттары һәм теләктәре менән бүлеште 10-сы синыф уҡыусыһы Наҙгөл Әхмәтшина.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Үҙ халҡының тарихын һәм шәхестәрен белгән быуындың киләсәге өмөтлө, тибеҙ. М. Кәрим исемендәге 158-се Башҡорт гимназияһында тап шундай үткәнен хәтерендә тотҡан, ә яҡты киләсәгенә юлды үҙ тырышлығы менән ярған балалар уҡый. Ысынлап та, ойоштороусылар үҙҙәре әйтмешләй, өй йәме - балаларҙа, гимназия йәме - уҡыусыларҙа, илдең йәме - Мостай Кәрим кеүек шәхестәре булған халыҡта.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан хөкүмәтендә яңы бассейндар һәм боҙ һырғалаҡтары төҙөү программаһын әҙерләйҙәр. Булып үткән "Төҙөлөш сәғәте"нән һуң республика Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә 2024 йылға тиклем 16 районда бында бер ҡасан да булмаған бассейндар төҙөләсәген белдерҙе. Бассейндар түбәндәге муниципалитеттарҙа: Архангел, Баҡалы, Благовар, Балаҡатай, Дыуан, Ҡалтасы, Ҡариҙел, Ҡырмыҫҡалы, Ҡыйғы, Нуриман, Стәрлетамаҡ, Өфө, Саҡмағош райондарында, Межгорьела, Бөрөлә һәм Өфөнөң Шакша биҫтәһендә һалынасағы билдәләнде.

✓Башҡортостан Башлығы, Агросәнәғәт комплексы хеҙмәткәрҙәре көнөнә арналған тантаналы йыйылышта сығыш яһап, быйыл лайыҡлы уңыш - 3,3 миллион тоннанан ашыу иген йыйып алынған тип билдәләне. Радий Фәрит улы республиканың иң яҡшы райондарын юғары ҡаҙаныштары өсөн хөкүмәт дипломдары менән бүләкләне, ә иң яҡшы ун комбайнсы, механизатор һәм водитель уның ҡулынан яңы "Шевроле Нива" автомобиле асҡыстары алды.

✓"Берҙәм Рәсәй"ҙең XIX съезында Башҡортостандан 20 делегат ҡатнаша. Шулай уҡ съезға Партия Генсоветы ағзалары Константин Толкачев һәм Тимур Ғилмийәров бара. "Берҙәм Рәсәй"ҙең XIX съезы 22-23 ноябрҙә ойошторола. Унда эшкә йомғаҡ яһала, киләһе йылда хәл итергә тейешле бурыстар ҡуйыла. "Берҙәм Рәсәй"ҙең киләһе һайлау циклында ҡатнашыуын тикшереү күҙаллана.

✓Халыҡтар берҙәмлеге көнөн байрам итеүгә бәйле ноябрь өсөн пенсия һәм социаль түләүҙәр ваҡытынан алда - 1 ноябрҙән таратыла башлай, тип хәбәр иттеләр Пенсия фондының Башҡортостан буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәтенән. 5 ноябрҙән пенсия гәҙәти график буйынса таратыла. Кредит ойошмаларына аҡса килешеүҙә билдәләнгән ваҡытта, 12 ноябрҙән башлап күсерелә.

✓Ҡаҙанда Башҡорт мәҙәниәте һәм мәғарифы көндәре тамамланды. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, саралар республика Башлығы гранты аҡсаһына тормошҡа ашырыла. Башҡортостандан сараға Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы рәйесе урынбаҫары һәм Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы президиумы рәйесе Эльвира Айытҡолова етәкселегендәге делегация барҙы.

✓ *"Ауылда эш юҡ, тип ялҡауҙар ғына әйтә. Эшләйем тигән кешегә эш бар ул. Күп итеп мал аҫырарға, ҡош-ҡорт көтөргә, ер алып, иген, емеш-еләк үҫтерергә, бал ҡорто тоторға, арба-сана яһарға, дуға бөгөргә һ.б..."*



*ИШАРА*

**Һуңғы ваҡытта күп кенә ауылдарҙа йорттары һүтелеп һатылғандан һуң урындарының өңөрәйешеп, мейес мөрйәләренең һерәйешеп ултырыуы көңөлдөң дә "өңөш" урынын - ытырғаныу тойғоһон барлыҡҡа килтерә. Элек тик һуғыш ваҡытында ғына күҙәтелгән был күренештең сәбәп-асылы ниҙә һуң? Кемгәлер ҡот-бәрәкәт, ырыҫ-бәхет килтерер өсөн һалынған йорттар ни өсөн хужаһына хеҙмәт итер мөҙҙәте етмәйенсә һатыла? Тәүҙә өйҙәр, аҙаҡ ерҙәр һатылмаҫмы? Бер урындан икенсе урынға күсерелгән йорттоң ҡото буламы? Ошо һорауҙар таш булып, баш особоҙҙа аҫылынып торғанда йәмәғәтселек вәкилдәре урындағы власть һәм хоҡуҡ һаҡлау органдары вәкилдәре менән имен ҡалған өйҙәрҙән-өйҙәргә йөрөп, самогон ҡыуыусыларҙы эҙләй…**

# ӨҢРӘЙГӘН ӨЙ УРЫНДАРЫ…



Ауылдарҙа буш өйҙәрҙең һәм өңөрәйгән өй урындарының барлыҡҡа килеүенең төп сәбәбе - эшһеҙлек. Ауылда эш урыны булмаған өс балалы ир менән ҡатындың хатта ҡыш уртаһында ла ҡалаға барып "морон төртөүенә" хәбәрҙармын. Ундайҙарҙың барыһы ла ҡалала йәшәп китә алмай, күбеһе кире ауылға әйләнеп ҡайта, ҡайһылары йорт-ҡаралтыһын, мал-тыуарын һатып, ҡаланың иң ауыр һәм уңайһыҙ шарттарында ғүмер ҡыҫҡарта.

"Мин үҫмер саҡтан алып колхозда эшләнем. Элек көнө-төнө трактор менән йырлай-йырлай баҫыуҙы һөрә торғайным. Хәҙер шунан мәхрүммен. Иртән тороп эшкә барыуҙан да, кис эштән ҡайтыуҙан да ҙурыраҡ бәхет юҡ. Эшләргә генә мөмкинлек бирһендәр, хатта бер тин түләмәһәләр ҙә, эшләргә ризамын..." - тигәйне тыуған ауылында эшһеҙлектән ары-бире һуғылған бер ағай. Һуңғы йылдарҙа етәкселек һәм журналистар өсөн ятланған бер фраза модаға әүерелде: "Ауылда эш юҡ, тип ялҡауҙар ғына әйтә. Эшләйем тигән кешегә эш бар ул. Күп итеп мал аҫырарға, ҡош-ҡорт көтөргә, ер алып, иген, емеш-еләк үҫтерергә, бал ҡорто тоторға, арба-сана яһарға, дуға бөгөргә, йорт йыһаздары, мебель эшләргә, ағас эше менән булышырға була, һ.б..."

Хуп. Хәҙер инде мәсьәләгә ысынбарлыҡ күҙлегенән яҡыныраҡ килеп ҡарайыҡ. Ғалимдар иҫәпләүенсә һәм ябай күҙгә күренеүенсә лә, ауыл халҡының һәм, ғөмүмән, кешелектең барлығы ете проценты ғына үҙаллы эш асып, шунан килгән аҡсаны йәшәү сығанағы итеп йәшәргә һәләтле. Юғарыла һанап үтелгән кәсептәрҙең барыһы ла тик баҙар менән тығыҙ һәм уңышлы бәйләнештә булғанда ғына шундай сығанаҡҡа әүерелә ала. Ә беҙҙең илдә хәҙер етештереү өлкәһе менән баҙар араһында ҙур упҡын барлыҡҡа килде.

**Баҙар, асылда, эре-эре корпорациялар һәм сит илдән килеүселәр ҡулында. Бер мәл баҙарҙарҙан килмешәктәрҙе ҡыҫырыҡлап сығарыу хаҡында махсус ҡарар ҙа ҡабул ителде, ул, асылда, бер асылған нөктәләрҙе ҡайтанан, килешеү буйынса урындағы халыҡ вәкилдәре исеменә теркәү акцияһы ғына булып сыҡты.**

Ысын хужалар "күләгәгә", баҙар прилавкаһы аҫтына инеп йәшеренде.

Был дөрөҫ. Ауыл халҡының үҙ ҡулы менән етештергән тауарын үҙ ҡулы менән баҙарҙа һатыу мөмкинлеге нығ сикләнгән икәне, шуға ла етештергән тауарынан нисек ҡотолорға белмәҫ хәлгә еткерелгән кешенең уны арзан ғына хаҡҡа аралашсыларға осорорға мәжбүр булыуы ла дөрөҫ. Ләкин һәр ауыр хәлдән сығыу юлы бар икәнен уйлай белмәй шул беҙҙең замандаштарҙың ҡайһы берҙәре. Һөҙөмтәһен уйламаҫтан, башына килгән уйҙы еңел генә тормошҡа атҡара ла ҡуя. Мәҫәлән, өйөн һата ла, өс тин аҡсаһын усына йомоп, икенсе урынға йәшәргә күсә. Әммә икенсе урынға барып "ҡунаҡлаған" йорт хужаларының ҡото, ырыҫы барыбер нигеҙҙә ҡала икәнен беләме улар? Ата-олатайҙар меңәр йылдар һаҡлап килгән нигеҙҙе нисек шулай еңел генә яттар ҡулына тапшырырға була! Йәки, ауыл халҡын эш менән тәьмин итеү, ауылдарҙа эш урындарын ойошторооу бөтә мәсьәләләрҙе үҙенән-үҙе хәл итәсәк, тип лаф орорға яратабыҙ. Хәл итмәйәсәк. Тәүҙә айыҡырға, "сәмиғулла" кеүек афәттәрҙән ҡотолорға кәрәк халҡыбыҙға. Ата-бабаларҙан ҡалған йәшәйеш асылыбыҙ, тормош маҡсатыбыҙ, йорт нигеҙе, рухи мираҫ, милләт киләсәге тураһында уйланырға өйрәнергә кәрәк. Бик тә булмаһа, уйлана белгән рухлы лидерҙар һүҙенә ҡолаҡ һалыу кәрәк. Беҙ бит һәр саҡ ошондай лидерҙар артынан барғанбыҙ. Ә был юлдарҙы уҡыусылар ниндәй фекерҙә икән?

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# БАЛАҢА...

## зыянлы кино ҡаратма!

**Кешегә киноның тәьсире бармы? Бар. Һәм ул күп осраҡта әҙәби әҫәргә ҡарағанда күпкә көслөрәк тә. Быны, әлбиттә, бик яҡшы белгәндәр, шунлыҡтан, совет осоронда кинофильмдарҙың идея-тематикаһы ла талапсан күҙәтеү аҫтында булған. Бөгөн иһә был индустрияла, күп башҡа өлкәләрҙәге кеүек үк, бер ниндәй ҙә сикләү тигән нәмә юҡ. Һәм унан килгән хәүефкә лә етди иғтибар бирелмәй. Ә ул хәүеф бар.**

Хәтерегеҙҙәлер, "Однажды в Америке" фильмынан һуң илдә йәштәр араһында енәйәт көсәйеп китеп, күп йәш ҡулға алыныусылар шул фильм геройҙары башҡарғанды ҡылған ине. Был хаҡта гәзиттәрҙә мәғлүмәттәр ҙә булды. "Бригада" фильмы ла шундай уҡ "уңышҡа" өлгәште. 2005-2006 йылдарҙа Сибай ҡалаһында яҡын танышымдың улын тиҫтерҙәре юҡ ҡына сәбәп өсөн туҡмап үлтерҙе. Тыҡрыҡта юл бирмәгәне өсөн генә. Туғыҙ тапҡыр бысаҡ йәрәхәте һәм башҡа яраларҙан йән биргән ун алты йәшлек егет эшен тикшереү барышында үлтереүсе ике үҫмерҙең "Бригада"лағы Белый образында көн итеп маташыуҙары асыҡланды. Йәнәһе, ябай ярлы ғаиләлә үҫеп, үҙ ҡатылыҡтары менән юл ярып күтәрелмәксе булғандар. Йәғни, үҫмерҙәр был фильмдың мәғәнәһен ошолай аңлаған. Ә бит ул киноның башҡа мәғәнәһе лә юҡ, "Бригада", "Бумер" кеүек "сәнғәт" өлгөләре ана шул үлтереү, талау, ҡурҡытыу менән үргә үрмәләп була тигәнде генә тәкрәрләй.

Һуңғы көндәрҙә ил буйынса "Джокер" фильмы хәтәр итеп рекламалана. Бородина, Басков, Билан кеүек Рәсәй шоу-бизнесы йондоҙҙары: "Йәштәр, был фильм тап һеҙҙең өсөн! Ҡарағыҙ! Үкенмәҫһегеҙ!" - тип өгөтләп ҡарарға саҡыра. Интернетта "Джокер"ҙың премьераһында тамашасы аяғүрә баҫып оҙаҡ ҡул сапты", - тип тә яҙылған. Беҙ ҙә киттек был киноны ҡарарға. Шундай маҡталған фильмға, әлбиттә, зал тулып йәш-елкенсәк килгәйне. Тамашанан әллә нимәләр көтөп, ниндәйҙер юғары тойғолар кисерергә әҙерләнеп килеп... ҡәнәғәтһеҙ сыҡтым, тиһәм, бик аҙы ғына әйтелер. Фильмдан шаҡ ҡатып, ытырғанып, әллә ниндәй сараһыҙлыҡҡа тарып сыҡтым, тигәндә дөрөҫөрәк булыр, моғайын. Шизофреник сирле комик Артур Флектың яҙмышы һүрәтләнә. Бер яҡтан, йәмғиәттең ауырыу кешегә ҡарата булған ғәҙелһеҙ ҡарашы һәм шул ҡараш нигеҙендә барлыҡҡа килгән трагедиялар тураһында һүҙ бара кеүек фильмда, ә икенсе яҡтан, тормош һиңә ғәҙел түгел тип иҫәпләгәндә, һин унда роле булған һәр кемде тота ла үлтерә алаһың, тигән үтә күренмәле ҡотҡо ла бар. Йәнәһе, ғәҙәти булмаған кешенең йәмғиәткә ҡарата протесы был. Йәнәһе, ғәҙәти булмағандарҙы йәмғиәт аңламай. Ә бит ысынында был әҙәм сәләмәт түгел! Ул шизофреник сирле үлтереүсе - шул ғына. Кино төшөрөүселәр бына ошо геройҙы үҙҙәрен йәмғиәт аңламай һәм ҡабул итмәй тип уйлаусы йәштәр тарафынан яҡлатып, оло ғауға сығартты. Комик битенә төшөргән гримм һүрәтендәге маска кейгән йәштәр бөтөн ҡаланы ҡыйратып ташланы...

Залда ултырған йәштәр киноны нисек ҡабул иткәндер инде, миңә был психикаһы нығынып етмәгән публика бик йәл булды. Интернетты асып ҡарағыҙ, джокер маскаһында үҫмерҙәр, уҡыусылар тарафынан ҡылынған енәйәттәр теркәлә лә башлаған. Әйткәндәй, Артур Флектың маскалары баш ҡаланың "Универмаг" туҡталышы ер аҫты юлы баҙарында һатыуға ла сығарылған. Бөгөн бындай фильмдарҙы ил экранына сығарыуҙы тыйып та булмайҙыр, әммә һәр кем үҙ ғаиләһендә, һәр уҡытыусы класында ниндәйҙер аңлатыу, һөйләшеү, тәрбиә эштәре алып барырға тейеш. Йәштәрҙе "Джокер" кеүек ҡыйратыусы, йәнде ағыулаусы киноларҙан һаҡлайыҡ берүк!

**Лилиә СӘЙҒӘФӘРОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында Башҡортостандың халыҡ шағиры, күренекле яҙыусы, драматург, йәмәғәт эшмәкәре Мостай Кәримдең ун томлыҡ йыйынтығының исем туйы үтте. Йыйынтыҡта яҙыусының элек донъя күргән (проза, поэзия, драматургия, публицистика, көндәлектәр), шулай уҡ ҡулъяҙмала һаҡланған һәм быға саҡлы баҫылмаған әҫәрҙәре бар. Беренсе томы - 2009 йылда, унынсы томы 2019 йылда, яҙыусының 100 йыллығы алдынан нәшер ителде. Һәр томдың тиражы - 2 мең дана.

✓Башҡортостанда һалым инспекцияларының эш ваҡыты үҙгәрҙе. Эш көндәрендә халыҡты киске сәғәт 8-гә хәтлем ҡабул итәләр. Инспекция етәкселәре шәхси ҡабул итеү ваҡытын да арттырҙы. Башҡортостанда йыл һайын "бәхет хаттары" - фатирға, шәхси йортҡа, ер участкаһына һәм автомобилгә һалым түләү өсөн белдереүҙәр һәм квитанциялар таратыла.

✓БР Мәҙәниәт министрлығы музыка, театр, һынлы сәнғәт һәм хореография сәнғәте өлкәһендә һәләтле йәштәргә ярҙам күрһәтеү өсөн Башҡортостан Республикаһы Башлығы грантына конкурс үткәреү тураһында иғлан итте. Гранттар биреү тәртибенә ярашлы, грант дәүләт бюджет белем биреү учреждениеһына субсидиялар формаһында тапшырыла. Ғаризалар 2019 йылдың 28 октябренән Башҡортостан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығында ҡабул ителә. Тулыраҡ мәғлүмәт өсөн телефон: 8 (347) 280-87-64.

✓Республиканың 100 йыллығы һәм Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең бер быуатлыҡ юбилейы айҡанлы "Алтын ҡурай" халыҡ-ара журналистар конкурсына йомғаҡ яһалды. Жюри етәксеһе - Рәсәйҙең Журналистар союзы рәйесе Владимир Соловьев. Ойоштороусылар - Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың журналистар союздары, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте, Мостай Кәрим исемендәге фонд, "Өфө" журналы редакцияһы.

✓Башҡортостанда 14 октябрҙән һанлы тапшырыуға күсеү башланды. Реформа республика халҡының - 15-20 процентына ҡағыла. Кабель телевидениеһын ҡарағандар өсөн бер нәмә лә үҙгәрмәй. Аҙ тәьмин ителгән граждандарға һанлы эфир йәки спутник телевидениеһын ҡабул итеү өсөн ҡорамал һатып алыу һәм ҡуйыу өсөн дәүләт ярҙамы күрһәтелә. Һорау менән 8 (800) 347 00-55 телефонына шылтыратырға мөмкин.

✓ *Ваҡытында ғариза биргән бөтә ғаиләләргә лә таныҡлыҡтар тапшырыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "сертификат"ты алған көндән башлап туғыҙ ай эсендә тотонорға мөмкин. Йорт Башҡортостан биләмәһендә булырға тейеш.*



ТӨРЛӨҺӨНӘН

## ҮҘ ЙОРТОНДО ТӨҘӨ!

**Башҡортостанда "Беренсе бала өсөн 300 мең һум ал" программаһы тамамлана. Билдәле булыуынса, торлаҡ шарттарын яҡшыртыуға мохтаж булған, 2019 йылдың 1 ғинуарына тиклем тәүге сабыйы тыуған ғаиләләрҙең 300 мең һумлыҡ "сертификат" (дөрөҫөндә ул "таныҡлыҡ" тип атала) алыу хоҡуғы бар ине. Уның менән ипотека түләргә, фатир һатып алырға йәки өй һалырға мөмкин. Ҡатнашырға теләгәндәр күп булғас, таныҡлыҡтарҙы бер нисә этапҡа бүлергә тура килгән.**

Беренсе этап - 2018 йылдың 3 сентябренә тиклем сиратҡа баҫҡан ғаиләләр. Уларға 200 миллион һум кәрәк. Ошо ғаиләләр өсөн документтар яңыртыла, 2019 йылдың ноябрендә барыһы ла әҙер була. Ата-әсәләргә мохтажлыҡ тураһында белешмәне һәм башҡа документтарҙы яңыртырға кәрәк. Быының өсөн хакимиәтегеҙҙең иҫәп һәм торлаҡ бүлеү бүлегенә мөрәжәғәт итегеҙ. Унда бөтә һорауҙарығыҙға ла яуап бирерҙәр. Икенсе этап - 2018 йылдың 3 сентябренән һуң иҫәпкә торған 1880 ғаилә. Быының өсөн 564 миллион һум талап ителә. Был аҡса республиканың киләһе йылға бюджетында ҡаралған. Дәүләт Йыйылышы депутаттары киләһе йылға бюджетты раҫлағас ҡына сертификаттар һорап мөрәжәғәт итергә ярай. Ошо этап сиктәрендә сертификаттарҙы 2020 йылдың башында уҡ алырға мөмкин булыр, тип күҙаллана. Шулай итеп, ваҡытында ғариза биргән бөтә ғаиләләргә лә таныҡлыҡтар тапшырыла. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "сертификат"ты алған көндән башлап туғыҙ ай эсендә тотонорға мөмкин. Йорт йәки фатир Башҡортостан биләмәһендә булырға тейеш.

## АЛИМЕНТҠА ХОҠУҠ...

**Башҡортостан парламенты депутаттары туғандарынан һәм элекке тормош иптәшенән алиментҡа мохтаж эшкә һәләтһеҙ пенсия алды йәшендәгеләрҙең хоҡуғы тураһында закон ҡабул итте.**

Элек пенсия йәшенә еткән кешеләрҙең генә бындай хоҡуғы бар ине. Хәҙер закон проекты ҡатын-ҡыҙҙарға - 55, ир-егеттәргә 60 йәштән шундай хоҡуҡ бирә. Республика Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев һүҙҙәренсә, закон пенсия йәшен арттырыуға бәйле ҡабул ителгән һәм пенсия алды йәшендәгеләрҙең социаль мәнфәғәттәрен яҡлау өсөн әҙерләнгән. "Хеҙмәт пенсияһына сығыуҙың яңы тәртибе алимент алыусыларҙың хоҡуғын сикләргә тейеш түгел. Улар, ҡағиҙә буларaҡ, йәше, һаулыҡ торошо буйынса махсус яҡлауға мохтаж. Күптәре өсөн алимент йәшәү өсөн берҙән-бер сығанаҡ булып тора". Парламент спикеры яңы закондың киң даирә кешеләрҙең мәнфәғәттәренә ҡағылыуын билдәләне. Ғәмәлдәге ҡануниәтҡә ярашлы, ата-әсәләр үҙҙәренең эшкә һәләтһеҙ ярҙамға мохтаж балиғ булған балаларын тәрбиәләргә һәм, киреһенсә, эшкә һәләтле балиғ булған балалар үҙҙәренең эшкә һәләтһеҙ ярҙамға мохтаж ата-әсәләрен ҡарарға һәм улар хаҡында хәстәрлек күрергә тейеш. Эшкә һәләтһеҙ ярҙамға мохтаж балиғ булған ағай-апайҙар, олатай-өләсәйҙәр һәм ейәндәр, фактик тәрбиәләүселәр, үгәй ата-әсә алимент алырға хоҡуҡлы. Ғаилә тарҡалғанға тиклем йәки ғаилә тарҡалғандан һуң бер йыл эсендә эшкә һәләтһеҙ тип танылған тормош иптәшенең дә алиментҡа хоҡуғы бар.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ХӨКҮМӘТ ЯҢЫРҘЫ

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республика башҡарма власть органдарының яңы структураһы билдәләнгән указға ҡул ҡуйҙы. Документҡа ярашлы, Башҡортостан Республикаһының башҡарма органдары структураһында хәҙер 14 министрлыҡ, 11 дәүләт комитеты, дүрт идаралыҡ, бер агентлыҡ һәм бер дәүләт инспекцияһы бар.**



"Министрлыҡтарҙың һәм ведомстволарҙың күпселек өлөшө үҙҙәренең исемен, структураһын һәм етәкселек составын һаҡлап ҡалды, - тип билдәләне Радий Хәбиров 28 октябрҙә республика хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә. - Ләкин ҡайһы бер үҙгәрештәр бар".

Әйтәйек, Башҡортостандың Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты **Башҡортостан Республикаһының Эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитетына һәм Башҡортостан Республикаһының Туризм буйынса дәүләт комитетына** бүленде.

Республиканың Иҡтисади үҫеш министрлығы **Башҡортостандың Иҡтисади үҫеш һәм инвестиция сәйәсәте министрлығы** тип үҙгәртелде.

Башҡортостандың Сәнәғәт һәм инновация сәйәсәте министрлығы хәҙер **Башҡортостан Республикаһының Сәнәғәт һәм энергетика министрлығы** тип атала.

Мәғариф министрлығы **Башҡортостандың Мәғариф һәм фән министрлығы** тип үҙгәртелде.

Башҡортостан Республикаһының Мәғлүмәтләштереү һәм "Асыҡ республика" системаһының эш итеүе мәсьәләләре буйынса дәүләт комитеты **Башҡортостандың Дәүләт идара итеүен һанлы үҫтереү министрлығы** тип атала.

Башҡортостан Республикаһының Социаль-иҡтисади үҫеште күҙәтеү буйынса дәүләт комитеты **республиканың Конкурентлы сәйәсәт буйынса дәүләт комитеты** тип үҙгәртелде.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров шулай уҡ республика хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә хөкүмәттең яңы составын иғлан итте. Уның һүҙҙәренсә, Башҡортостан Башлығы республика Хөкүмәтен үҙе етәкләйәсәк. Радий Хәбировтың ике яңы беренсе урынбаҫары була. Улар - **Андрей Назаров** һәм **Илшат Тажетдинов**. Андрей Назаровтың төп бурысы - республиканың 2024 йылға тиклемге социаль-иҡтисади үҫешенең стратегик йүнәлештәре тураһында указда билдәләнгән Хөкүмәттең милли проекттар күрһәткестәренә өлгәшеү һәм маҡсатлы күрһәткестәрҙе үтәүҙе тәьмин итеү эшен координациялау. Илшат Тажетдинов республика Хөкүмәте аппаратын етәкләргә, уның эшмәкәрлеген тәьмин итеү мәсьәләләрен алып барырға һәм власть органдарының Хөкүмәт ҡарарҙарын үтәүен контролдә тоторға, республика проект офисын координацияларға тейеш.

Хөкүмәттә 7 вице-премьер була. **Рәйеф Әбдрәхимов**, **Илшат Фәзрахманов**, **Ленара Иванова**, **Борис Беляев** үҙ вазифаларында ҡалды. **Фәнүр Йәғәфәров**, **Ирек Сәғитов** һәм **Рөстәм Моратов** Хөкүмәт премьер-министрының яңы урынбаҫарҙары итеп тәғәйенләнде.

Республиканың яңы ер һәм мөлкәт мөнәсәбәттәре министры итеп Гөлшат Арыҫланова тәғәйенләнде. Максим Забелин - һаулыҡ һаҡлау министры, Әминә Шафиҡова - мәҙәниәт министры, Геннадий Разумикин - һанлы үҫеш министры, Руслан Хәбибов - йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры, Лира Игтисамова - финанс министры, Александр Шельдяев - сәнәғәт һәм энергетика министры, Римма Бойцова - Эшҡыуарлыҡ буйынса дәүләт комитеты, Денис Булатов - Конкурентлы сәйәсәт буйынса дәүләт комитеты, Фәрит Ғүмәров - Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты, Алексей Гусев - Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау буйынса дәүләт комитеты, Руслан Мирсаяпов - Тышҡы иҡтисади бәйләнештәр буйынса дәүләт комитеты, Тимур Мөхәмәтйәнов - Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты, Салауат Нафиҡов - Туризм буйынса дәүләт комитеты, Борис Мелкоедов - Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы, Азат Йыһаншин - ветеринария идаралығы, Илһам Фәтҡуллин архив эштәре буйынса идаралыҡ етәксеһе итеп тәғәйенләнде.

"Түбәндәге министрлыҡтар һәм ведомстволар етәкселәре федераль министрлыҡтарға һәм ведомстволарҙа һөйләшеп килешеүҙәр тамамланғансы вазифа башҡарыусы статусында эшләй: Урал Искәндәров - тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры вазифаһын башҡарыусы, Айбулат Хажин - мәғариф һәм фән министры вазифаһын башҡарыусы, Марат Шәрәфетдинов - урман хужалығы министры вазифаһын башҡарыусы, Марат Әхмәҙуллин - Төҙөлөш һәм архитектура буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы, Светлана Бурдюк - Тарифтар буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы, Владимир Спеле - Юстиция эштәре буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы, Илдар Шафиҡов - Торлаҡ һәм төҙөлөш күҙәтеүе буйынса дәүләт комитеты рәйесе вазифаһын башҡарыусы, Альберт Яримов - мәғариф өлкәһендә контроль һәм күҙәтеү буйынса идаралыҡ начальнигы вазифаһын башҡарыусы. Федераль министрлыҡтарҙың етәкселәре һеҙҙе тәғәйенләүгә ризалыҡ бирҙе, уларҙан рәсми документтар көтәбеҙ, документтар килеү менән "вазифа башҡарыусы" тигән һүҙ алып ташлана", - тип асыҡлыҡ индерҙе Радий Хәбиров.

"Кадрҙар сәйәсәте кәсәгилешлеге һаҡланды һәм алда Хөкүмәткә ҙур бурыстар көтә", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә "Хәкимиә" мәсете манараһына ярым ай ҡуйылды. "Хәкимиә" мәсете - тарих һәм архитектура ҡомартҡыһы. Ул ҡыҙыл кирбестән һалынған, ҡабарынҡы биҙәкле ике мөһабәт манараһы булған. Мәсеттең бейеклеге 18 метрға еткән. 2002 йылдан алып бөгөнгәсә Рәсәй мосолмандары Үҙәк диниә назараты һәм Өфөнөң Рәсәй ислам университеты булышлығында мәсетте тергеҙеү эштәре алып барылды.

✓Башҡорт халҡының "Урал батыр" эпосы ҡырғыҙ теленә тәржемә ителде. Ул быйыл уҡ баҫылып сығырға тейеш. Тәржемәнең авторы - Ҡырғыҙстан ғалимы, филология фәндәре докторы Ибраим Абдулвәлиев. "Башҡорттарҙың героик "Урал батыр" эпосының теле ҡырғыҙҙарҙың "Манас" эпосы теленә оҡшаш. Асылда, мин фольклор телен тәржемәләнем, был - боронғо тел, унда неологизмдар юҡ. Фольклор бит сюжеты менән генә түгел, теле менән дә һаҡлана", - ти тәржемәсе.

✓Ошо көндәрҙә Өфөлә "Глобалләшеү һәм полиэтник мөхит шарттарында башҡорт теле һәм әҙәбиәте: тәжрибә һәм перспективалар" конференцияһы үтте. Ғилми тел форумын ойоштороусылар - Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте, Рәсәй Федерацияһының Фән һәм юғары белем министрлығы, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте, Рәсәй Фәндәр академияһы, Башҡортостан Мәғариф министрлығы.

✓Өфө һылыуҡайы Эльмира Шәйехова "Волга буйы ынйыһы-2019" матурлыҡ конкурсында еңде. Конкурста ул Өфө исеменән сығыш яһаны. Ҡыҙ "Мисс Башкортостан - 2018", "Краса Уфы - 2017" исемдәренә, "Мисс Туризм России - 2019" Бөтә Рәсәй конкурсының "Иң яҡшы милли кейем" Гран-прийына эйә, Ҡытайҙа "Мисс Туризм Планеты - 2018" халыҡ-ара конкурсы призеры.

✓27 октябрҙән "Өфө" халыҡ-ара аэропорты көҙгө-ҡышҡы теҙмәгә күсә. Был 2020 йылдың 28 мартына тиклем ғәмәлдә була. 37 йүнәлеш буйынса рейстар башҡарыу күҙаллана, осоштарҙы 25 авиакомпания ғәмәлгә ашыра. Өфөнән Таиландҡа Утапао һәм Пхукет йүнәлештәре буйынса осоу мөмкинлеге бар. iFly аҙнаһына ике тапҡыр пассажирҙарҙы Өфөнән Ҡытайҙың Санья курортына йөрөтөүҙе дауам итә. Һиндостанға (Гоа), Дубайға, Берләшкән Ғәрәп Әмирлектәренә, Анталъяға осорға мөмкин.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



**Өфө ҡалаһында быйыл вакансиялар банкына 105 мең эш урыны индерелгән. Был былтырғы мәғлүмәт менән сағыштырғанда 20 процентҡа күберәк. Йылдың 9 айында эш эҙләп 18 мең кеше һәм хеҙмәткәрҙәр эҙләшеүҙә ярҙам һорап 9 мең эш биреүсе мөрәжәғәт иткән. Өфө ҡала округы хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә был хаҡта Өфө ҡалаһы халыҡтың мәшғүллек үҙәге директоры Рәзинә Насырова сығыш яһаны.**

# ЭШЛӘЙБЕҘ, АРТАБЫҘ...

Рәзинә Тимерхан ҡыҙы билдәләүенсә, эш һорауһылар менән эш тәҡдим итеүселәр араһындағы һөнәри-квалификацион тигеҙһеҙлекте бөтөрөү маҡсатында йәш граждандар һәм уларҙың ата-әсәләре өсөн һөнәр һайлау буйынса саралар үткәрелә. Студенттар һәм уҡыу йорттарын тамамлаусылар өсөн карьера көндәре уҙғарыла һәм уларға эш урындары тураһында мәғлүмәт бирелә. Мәктәп уҡыусыларына предприятиеларҙа һөнәр оҫталары менән осрашыуҙар ойошторола. Бынан тыш, милли проекттарҙы тормошҡа ашырыу буйынса ла эштәр атҡарыла. Былтыр Башҡортостан "Хеҙмәт етештереүсәнлеге һәм мәшғүллеккә ярҙам итеү" проектын тормошҡа ашырыусы 16 пилот-төбәк иҫәбенә ингән. Уны тормошҡа ашырыу барышында "Гидравлика" һәм "Стеклонит" Өфө предприятиелары хеҙмәткәрҙәрен өҫтәнләклө уҡытыу ойоштророла һәм 462 хеҙмәткәр производство, мәғлүмәт технологиялары һәм системалары менән заманса идара итеү, машиналар эшләү предприятиеларында кадрҙар технологияларын автоматлаштырыу буйынса уҡып сыға. Былтыр бындай предприятиелар һаны 10-ға етә һәм уларҙа меңгә яҡын хеҙмәткәр предприятиены цифрлаштырыуға комплекслы ҡараш буйынса белемен камиллаштыра, эшсе һәм инженер һөнәрҙәре буйынса квалификацияһын үҫтерә. Шулай уҡ Өфө ҡалаһының мәшғүллек үҙәге "Демография" милли проектын тормошҡа ашырыуҙа ла ҡатнаша, уның сиктәрендә хаҡлы ялға сығыу алдында торған категорияға яңы булдырылған эш урындары буйынса һөнәрҙәргә уҡытыу ойошторола. Киләһе йылда тормошҡа ашырыла башлаясаҡ федераль проект бәләкәй балалары булған ғаиләләрҙең иҡтисадиға, әсәләрҙең бала ҡарау ялынан һуң һөнәри реадаптацияһына, һөнәри эшмәкәрлекте ғаилә бурыстары менән бергә алып барыу, балаларҙың мәктәпкәсә белем алыу мөмкинлеген күтәреүгә йүнәлтелә.

Артабан ҡала хакимиәтенең Дәүләт статистикаһы бүлеге начальнигы Оксана Даянова сығыш яһаны. Ул билдәләүенсә, Башҡортостандың баш ҡалаһында 2019 йылдың 1 ғинуарына 1 135 480 кеше йәшәгән. Был - Рәсәйҙең миллионлы ҡалалары араһында һигеҙенсе күрһәткес (Мәскәүҙән һәм Санкт-Петербургтан тыш, сөнки улар - айырым төбәктәр). 2018 йыл менән сағыштырғанда, бер йылда Өфөлә йәшәүселәр һаны дүрт меңгә артҡан. "2018 йылда миллиондан ашыу кеше йәшәгән алты ҡалала ғына халыҡтың тәбиғи артыуы һаҡланған, шул иҫәптән Өфөлә - плюс 1527 кеше, - тип билдәләне О. Даянова. - Һуңғы йылда Башҡортостандың баш ҡалаһында халыҡтың үлеме 1000 кешегә 10,6 кимәлендә булған. Был - өсөнсө күрһәткес, ул дөйөм республика (12,4) һәм Рәсәй кимәленән (12,5) аҙыраҡ". Сығыш яһаусы халҡы миллиондан ашҡан ҡалаларҙың ҡайһы бер социаль-иҡтисади күрһәткестәрен дә сағыштырҙы. Бөгөнгә халҡы миллион ярымдан үткән ҡала булып Новосибирск тора, 1 135 480 кеше иҫәпләнгән Өфө - һигеҙенсе урында. Былтыр 13 миллионлы ҡаланың алтыһында, шул иҫәптән Өфөлә лә, тәбиғи үҫеш күҙәтелгән. Йылдың тәүге яртыһында баш ҡала Омскиҙан ҡала сәнәғәт предприятиелары етештергән тауарҙарҙы сығарыу күләме буйынса икенсе урында килә.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*БАШ ҠАЛАМ*

# МӘҢГЕЛЕК УТ...

## ризыҡ йылытыу урынымы?



**Мөмкинлек булғанда көн һайын Мәжит Ғафури исемендәге паркта йөрөргә яратам. Тәбиғәттең ниндәй миҙгеле булыуына ҡарамаҫтан, нисәләр сәғәт ваҡытымды ошо паркты ҡыҙырып үткәрәм. Йәйгеһен ағастар япраҡҡа төрөнөп ултырғанда был урын үҙенсә матур. Яҙын ағастар бөрөһө шартлап ярылғанда яңы тормош башланғандай. Ҡышын иһә ул сихри аҡлыҡҡа сорналып, Ҡыш бабай яҙған әкиәт донъяһына алып инә.**

Көҙгөһөн парк тәүҙә алтын төҫкә мансыла, һуңыраҡ төрлө төҫтәрҙә балҡый ул. Һәм бер мәл, ағастар япраҡтарын ергә түшәгәс, ул үтәнән-үтә күренгәндәй, яланғасланып ҡала. Тап шул ваҡытта унда-бында асарбаҡтарҙың йылыныу маҡсатынан усаҡ яғыуын, шунда уҡ уҙҙәренә ашарға бешереүен күрергә тура килә. Әле көндәр ул тиклем һыуытмағанда улар шулай көн күрә, ә бына һалҡындар башланһа, нимә эшләрҙәр, ҡайһы подъезға йәки подвалға барып ояларҙар икән?

Шулай уҡ улар тиҙҙән Еңеү паркында ла күренә башлар, моғайын. Хатта ҡайһы берҙә Мәңгелек утта уҙҙәренә ризыҡ йылытып алалар икән, тигән һүҙҙәр ишетелә ине, ошо хәл быйыл да ҡабатланмаҫ, тип әйтеп булмай. Хәйер, Мәңгелек уттың ҡәҙере һуңғы йылдарҙа киткән кеүек. Беҙҙең быуын унда Бөйөк Ватан һуғышында яу яландарында ятып ҡалған атай-олатайҙарҙы иҫкә алырға, уларға баш эйеү мөмкинлеге булмағанлыҡтан, Мәңгелек утҡа баш эйергә килә, яңы өйләнешкән парҙар ҙа тын ғына тороп сәскә һалып китә ине. Хәҙер, бәхтиһәң, ут эргәһенә өшөгән ҡулдарын йылытыу маҡсатынан да киләләр икән.

Йайлап ҡиммәттәр үҙгәрә. Бер көн килеп, ысынлап та, Мәңгелек ут асарбаҡтарҙың ризыҡтарын йылытып ашар, өшөгәндәрҙең йылыныр урынына ныҡлап әйләнеп китмәҫме икән?

**Илфат ИЛТЕНБАЕВ.**

*ҠЫҪҠАСА*

# ДҮРТ СӘҒӘТКӘ ҠЫҪҠАРА

✔ **Ауыл ерендә йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙарға 36 сәғәтлек эш аҙнаһы индереүҙе хупланылар.** Дәүләт Думаһы Рәсәй Федерацияһының Хеҙмәт кодексына бындай төҙәтмәләрҙе икенсе уҡыуҙа ҡабул итте. Унда хеҙмәт хаҡы 40 сәғәтлек эш аҙнаһына ҡарағанда кәм булмай тип билдәләнә. Шулай уҡ закон проекты сменалы эш трафигы булған урындарҙа ҡатын-ҡыҙҙарға арттырылған хеҙмәт хаҡы гарантиялай. Уҡыуҙарҙан һуң проектҡа тағы бер өҫтәмә индерҙеләр - закон үҙ көсөнә ингәс, эш хаҡын арттырыу күләме кәмергә тейеш түгел. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, әле ауыл ҡатын-ҡыҙҙарының ҡыҫҡартылған эш көнөнә хоҡуғы федераль закон менән нығытылмаған.

✔ **Башҡортостан парламенты депутаттары күп балалы ғаиләләргә дәүләт ярҙамы тураһындағы законға үҙгәрештәр ҡабул итте һәм 600 мең күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү алырға тейешле категорияларҙы киңәйтте.** "Һигеҙ һәм унан күберәк бала тәрбиәләгән ғаиләләргә ошондай ярҙам күрһәтелә лә инде. Был законды ҡабул иткәс, 23 йәшкәсә һигеҙ һәм унан күберәк балаһы булған ғаиләләр ҙә шундай ярҙамға хоҡуҡлы булды. Закон социаль ғәҙеллек булдыра", - тип аңлатты Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. Ҡабул ителгән закон тексына республика Башлығы ҡул ҡуйырға тейеш. Ул 2020 йылдың ғинуарынан көсөнә инер һәм төбәктә демографик хәлде яҡшыртыр тип күҙаллана.

✔ **Башҡортостанда 65 йәштән өлкәндәрҙе дауаханаға өҫтәмә тикшереү үтергә алып баралар.** Тейешле ҡарар республиканың рәсми хоҡуҡи-мәғлүмәт интернет-порталында баҫылып сыҡты. Проект "Өлкән быуын" һәм "Демография" программалары сиктәрендә бойомға ашырыла. Айырым социаль әһәмиәтле йәғошло булмаған сирҙәрҙе асыҡлау өсөн өҫтәмә тикшереүҙәр һәм скринингтар тураһында телефон, киң мәғлүмәт саралары аша хәбәр итеү күҙаллана. Ауыл халҡын социаль хеҙмәткәрҙәре булған махсус мобиль бригадалар йөрөтә. Хеҙмәт бушлай.

✔ **Башҡортостанда күп фатирлы йорттарҙа ремонт эштәрен башҡарыуға ҡағылышлы яңылыҡ индерергә йыйыналар.** Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев үҙҙәренә кескәй балаларҙың ата-әсәләре ремонт яһаған күршеләренә ялыуҙар менән йыш мөрәжәғәт итеүен билдәләне. Күп фатирлы йорт эсендә барған шаулы ремонт эштәре йәш әсәләргә балаларын көндөҙ йоҡлатырға ирек бирмәй. Ҡануниәтҡә ярашлы, эш көндәрендә - киске 11-ҙән иртәнге 7-гә, ял һәм байрам көндәрендә киске 11-ҙән иртәнге 7-гә тиклем шау-шыулы эштәр һәм күңел асыу тыйыла. Әле депутаттар Башҡортостанда көндөҙ "тынлыҡ сәғәте"н законлаштырырға теләй. Парламентта билдәләүҙәренсә, бер нисә юридик нюанс бар, ләкин башҡа төбәктәр ошо проблеманы хәл итеү тәжрибәһенә эйә, шуға күрә депутаттар коллегаларының тәжрибәһен өйрәнергә йыйына.

# Х А Л Ы Ҡ  Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Аллергия

❖ Белгестәр был төнәтмә балалар өсөн дә файҙалы, тип иҫәпләй. Төнәтмәне бер нисә ай дауамында эсергә кәрәк. 5 ҡалаҡ һарыгүҙ (золототысячник) үләне, 4 ҡалаҡ һары мәтрүшкә, 3 ҡалаҡ бәпембә тамыры, 2 ҡалаҡ ҡырҡбыуын үләне, 1 ҡалаҡ кукуруз мыйыҡсаһы, 1 ҡалаҡ аҡ сәскә, 2 ҡалаҡ гөлиемеш. Гөлиемеш менән бәпембә тамырын ваҡларға, үләндәрҙе ҡушып болғарға. Кистән эмаль кәстрүлгә 2 ҡалаҡ ошо ҡатнашманы һалырға, ҡайнатып йылымыс хәлгә тиклем һыуытылған 2,5 стакан һыу ҡойорға, төнгәләккә ҡалдырырға. Иртән ҡайнау хәленә еткерергә, әммә ҡайнатмаҫҡа. 4 сәғәттән һуң һөҙөргә. 1 стакан төнәтмәне әскә бүлеп, ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә. Һыуытҡыста һаҡларға. Дауаланған мәлдә танау, эйәк тирәһе боҙолорға, шулай уҡ бит, ҡулдарҙың тирәһе ҡатып торорға мөмкин. Был урындарға дарыуханала һатылған "Меновазин" тигән майҙы һөртөргә. Бер айҙан һуң тире таҙара. Дауаланыу курсы - 6 ай.

❖ 2-3 ҡалаҡ һуҡыр кесерткән сәскәһенә ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, термоста төнәтергә. 2 сәғәттән һуң һөҙөп, көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан алда яртышар стакан эсергә.

❖ 2 ҡалаҡ ваҡланған сельдерей тамырына 1 стакан һалҡын һыу ҡойорға, 3-4 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1/3 стакан эсергә. Сельдерейҙың яңы ғына һығылған һуты тағы ла файҙалыраҡ. Һутты көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә.

### Артрит, артроз

❖ Быуындарға тоҙ ултырһа, хәрәкәтләнеүе ауыр була башлай, шешенеү күҙәтелә, һөҙөмтәлә, артрит, артроз һ.б. сирҙәре барлыҡҡа килеүе ихтимал. Тоҙҙарҙан таҙарынып тороу кәрәк. Грейпфрут, сельдерей, кишер, шпинат һуты, ҡайын һыуы файҙалы. Был һуттарҙы ҡушып эсергә лә була.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ БАЛАҪЫ

Яҡуп ауылындағы бер балаҫта ҡыя шаҡмаҡ орнамент сирень, һары йәки ҡыҙылға буялған, диагональ буйынса симметрия һаҡлаған 15 төрлө төҫлө дүртмөйөштәрҙән (өсәр фигуранан 5 рәт) торған тура дүртмөйөш формаһындағы селтәрҙең эсенә индереп һуғылған. Ерлеге ҡара көрән төҫтә итеп ҡалдырылған; ул балаҫтың ситтәре, селтәр һыҙаттары буйлап һуҙылған, ҡыя шаҡмаҡтар эсенә инеп киткән (урталағы дүртмөйөш көрән ерлектә асыҡ айырылып торған), орнаменттың дөйөм һыҙатын билдәләгән.



*Боронғо балаҫ (Силәбе өлкәһе). В.М. Шутова һүрәте. 1972*

XX быуаттың икенсе яртыһында бөтә Башҡортостанда урындыҡ һәм иҙән келәмдәре һуғыу киң таралған-да, көнсығыш Урал арьяғында үҙенсәлекле ҡаурый һүрәтле түшәмдәр эшләнгән. Туҡыма ике төҫтән торған киң буйҙарҙан һуғылған, уның бер төҫө икенсеһенә ҡыялап күсерелгән. Буйҙа уйымдары ике төҫлө өсмөйөштәрҙән торған тешле һыҙатлы кәкерсәк (зигзаг) барлыҡҡа килгән. Буйҙарҙы ҡушып теккәндә туҡыманың урта һыҙығында дүрт төҫлө ҡаурый ҡыя шаҡмаҡтар килеп сыҡҡан - Урта Азия халыҡтарының биҙәкле туҡыусылығында киң таралған мотив.

Көнсығыш башҡорттары хатта һуңғы быуатта ла ҡаҙаҡтар һәм Урта Азия халыҡтары менән мәҙәни һәм хужалыҡ бәйләнештәрен өҙмәй. Был уларҙың мәҙәниәтендә эҙ ҡалдырмай үтеүе мөмкин булмаған.

Шулай итеп, өс өлкәнең һәр берәһендә (Урал алды, көньяҡ-көнсығышта һәм Урал арьяғының көнсығышында) балаҫтар эшләү һөнәренә урынға хас үҙенсәлектәр асыҡ сағылыш табыуы характерлы. Был сәнғәт XX быуат дауамында үҫешә һәм хәҙерге заман художестволы мәҙәниәте һәм ауыл көнкүрешендә лайыҡлы урын биләй.



*Ҡаурый биҙәкле буйҙар (Ҡурған өлкәһе). Автор фотоһы. 1972*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ЙӘШЛЕК ЙӘШНӘҮҘӘРЕ*

**Һеҙҙе "Кемдәр улар йәштәр һәм нимә ул йәш булыу?" тигән һорау ҡыҙыҡһындырғаны бармы? Булмаһа, үҙ-үҙегеҙгә биреп ҡарағыҙ әле ошо һорауҙы. Берәүҙәр: "Йәштәр - улар 18-ҙән 27 йәшкә, бәлки 14-тән 30-ға тиклемге кешеләрҙер?" - тиһә, икенселәре: "Юҡ. Улар теләһә ҡайһы йәштә лә үҙҙәрен йәш итеп тойған, бөтә яңы нәмәне еңел ҡабул иткән бәхетле әҙәмдәр", - ти. Өсөнсөләр йәштәрҙе тормошта аныҡ урынын билдәләп бөтмәгән, бер туҡтауһыҙ эҙләнгән, эксперименттар яһаған һәм нисә йәштә булыуына ҡарамаҫтан, балалығын ташлай алмай, тормоштоң бөтөн йәмен аңларға ашҡынған кешеләр, тиһә, бәғзеләре, йәштәр - йәмғиәттә алға әйҙәүсе көс, ти. Ә ҡайһы берәүҙәр: "Тормош мәшәҡәттәренән алыҫ торған, тәүәккәл аҙымдар яһарға һәләтле дәрте ташып торған кешеләр", - ти. Дөйөм алғанда, фекерҙәр күп төрлө. Шуның өсөн беҙ йәштәрҙең кем булыуын белеү өсөн уларҙың йөҙөнә түгел, ә күңеленә "бағырға" булдыҡ. Уларҙың донъяға ҡарашын башҡаса нисек белмәк кәрәк? Мин, мәҫәлән, тиҫтерҙәремә менән тротуарҙа кәйелеп-кәйелеп роликта шыуыусы шат күңелле ҡарсыкты һәм… 18 йәшлек "карттарҙы" ла күргәнем бар. Йәштәргә, башлыса студенттарға, ысынын ғына әйтеп, яуап бирегеҙ, тип, бер нисә һорау тәҡдим иттек. Уларҙың яуаптары һеҙгә лә ҡыҙыҡ булыр, моғайын.**

# ХӘҘЕРГЕЛӘР БЕЛЕМЛЕРӘК,

## әммә… тотанаҡһыҙыраҡ

### Үҙең тураһында барыһын да беләһеңме?

• Юҡ. Хатта нимә теләүемде лә белмәйем.
• Юҡ. Бер нимә лә билдәле түгел.
• Үҙемде тулыһынса беләм, тип уйлamайым. Моғайын, тағы ла үҙенсәлекле сифаттарым барҙыр.
• Белмәйем, әлбиттә. Төрлө хәлдәрҙә үҙемде нисек тоторомдо ла күҙ алдыма килтерә алмайым.
• Күп сифаттарым яйлап асыла бара.
• Белмәйем. Холҡом төрләнсәгә үҙгәреүсән, ҡайһы саҡта үҙ холҡомдан үҙем төшөнкөлөккә бирелəм.

### Һеҙгә ниндәй сифаттар етмәй?

• Тотанаҡлыҡ, аныҡлыҡ.
• Киң күңеллелек, аҙ ғына ояттһыҙыраҡ булыу, сабырлыҡ һәм рухи көс.
• Ҡайһы саҡта ҡыйыулыҡ һәм ныҡышмалылыҡ, ҡайһы саҡта әҙәплелек.
• Үҙ-үҙемә ышаныу, маҡсат яулау һәм аралаша белеү.
• Түҙемлелек, эш яратыу, юл ҡуя белеү һәм оптимизм.
• Ышанғанлыҡ, ҡыйыулыҡ, алдан күрә белеүсәнлек.
• Тотанаҡлыҡ, ҡыйыулыҡ, физик сәләмәтлек, ҡул көсө менән эшләй белеү, етеҙлек, тилберлек.
• Кәрәк мәлдә оятһыҙыраҡ булыу һәм рәхимһеҙлек.
• Алсаҡлыҡ, рух азатлығы, үҙ-үҙенде яратыу.
• Көсөргәнешле хәлдәргә тарығанда һалҡын ҡанлылыҡ.
• Кешелеклелек. Был сифат бөтөн нәмәне үҙгәртә.

### Ниндәй сифаттар "тулы ҡанлы" тормош алып барырға ҡамасаулай?

• Ныҡ ышанғанлыҡ.
• Һуңғы ваҡытта - хәтерһеҙлек.
• Ялҡаулыҡ.
• Ата-әсәгә һалынғанлыҡ.
• Маһайыусанлыҡ, кешегә ышанмау, бер ҡатлылыҡ.
• Ялҡаулыҡ, һис аҡланмаҫ тиҙ тоҡаныусанлыҡ.
• Ығышлыҡ, юҡ-барға ҡыҙып барыу, теләһә нимәнән шикләнеү, ҡурҡыу.
• Нимә ярҙам итә - шул уҡ нәмә ҡамасаулай: ниҙер эшләр алдынан тәүҙә оҙаҡ уйлайым.
• Тулы ҡанлы тормошта йәшәүҙән ҡурҡыу.
• Оялсанлыҡ.
• Әҙәплелек.
• Үҙ-үҙеңде яратыу һәм самаһыҙ ғорурлыҡ.

### Беҙҙең тормошта нимә етмәй?

• Кешеләрҙең үҙ-ара аңлашыусанлығы етмәй, сөнки шәхес тарҡалыуы күҙәтелә.
• Матди ҡиммәттәргә эйә булыу идеяһы кешелектең аҡылын томалап, хаталандырып, төп юл - ысын хәҡиҡәт юлынан яҙҙыра.
• Тыныслыҡ, әхлаҡ саФлығы, ярҙам һораусыға ҡул һуҙа белмәү.
• Аңлау, кешене тыңлай һәм "ишетә" белеү.
• Матди байлыҡтың ғәҙел, тигеҙһеҙ бүленеүе һәм ғәҙел хөкөм.
• Намыҫ, Аллаға ышаныу, бер-береңде яратыу, тоғролоҡ һәм бирелгәнлек.
• Киң күңеллелек һәм яҡшы ниәтле булыу.
• Ғәҙеллек һәм намыҫ.
• Ихласлыҡ, миһырбанлылыҡ һәм властың аҡыллы кешеләр ҡулында булыуы етмәй.
• Таҙалыҡ.

### Бөгөнгө йәштәр элекке быуын йәштәренән нимәһе менән айырыла, тип уйлайһығыҙ?

• Үҙен самаһыҙ иркен тотоуы, сикләнгәнлек юғалыуы, тыйнаҡһыҙлығы һәм күпкә мәғлүмәтле булыуы менән.
• Замана йәштәре белемле, әҙәпһеҙ, аяуһыҙ, саманан тыш ирекле, аҡыллы, ҡыҙыҡһыныусан.
• Замана йәштәре күпкә аяуһыҙ, йүгәнһеҙ, ә элекке быуындар тиҙ ышаныусан, бер ҡатлы, ләкин тәрбиәле.
• Замана йәштәре асыҡ, ҡыйыу һәм донъяла бөтөн әйберҙәргә анһат эйә булыу мөмкинлегенән боҙолған.
• Замана йәштәренең күбеһе үҙ-үҙенә тоғро ҡалып, бер һүҙле булыу тигән төшөнсәне белмәй.
• Бәйелһеҙлеге менән айырыла.
• Замана йәштәре күпкә рухлы һәм милли үҙаңлы.
• Мәғлүмәтле.
• Донъяға матур күҙлектән ҡарай белмәү менән.
• Замана йәштәренә тойғолар саФлығы, яуаплылыҡ, ә үткән быуын йәштәренә белем киңлеге етмәй.
• Бер ниндәй ҙа айырма юҡ. Бәлки, донъяны ҡабул итеү йәһәтенән генә берберенән айырылалыраҙыр. Замана йәштәренең тормошҡа ҡарашы күпкә ябай. Шулай ҙа...

### Ниндәй саралара атай-әсәйегеҙ менән бергә ҡатнашырға теләр инегеҙ?

• Фатирҙы ипкә килтергәндә.
• Көн һайын яртысәғәт һөйләшеп ултырыр, уларҙың һәм үҙемдең проблемалар хаҡында фекер уртаҡлашыр инем.
• Кәрт һуҡҡанда, киноға барғанда.
• Бергәләп моторһыҙ кәмәлә йөҙгәндә.
• Теләһә ҡайһы темаға һөйләшкәндә.
• Фатирҙы йыйыштырғанда.
• Киске ашта.
• Асыҡтан-асыҡ әңгәмәләшкәндә.
• Ғаилә кәңәшмәләрендә төрлө хәлваҡиғаларҙы бергәләп тикшергәндә.

### Һеҙҙеңсә, киләсәктә йәштәр ниндәй яҡҡа үҙгәрәсәк?

• Моғайын, улар үткән быуын йәштәрендәге ҡиммәттәрҙең барыһын да юғалтыр. Ул күренеш бөгөн үк күҙәтелә.
• Күпкә тотанаҡһыҙ һәм аяуһыҙ.
• Тағы ла бәйелһеҙерәк буласаҡтар. Магазиндарҙа наркотиктар ирекле рәүештә һатыласаҡ.
• Ҡоторошоу, йүгәнһеҙлек бөтөр, аҡылға ултырырҙар һәм күпкә миһырбанлы, һәйбәт булырҙар, тип өмөтләнәм.
• Йәштәр - йәшәйештең һәм йолаларҙың үҙгәреүен тәҙәтеү коэффициенты.
• Техник прогресҡа ярашлы, ысын тормош аҙыраҡ, ә күберәген тормош компьютер артында уҙасаҡ.
• Тормошта бер нәмә лә шыма юлдан бармай, унда түбәнгә тәгәрәүҙәр ҙә, юғарыға күтәрелеүҙәр ҙә бар. Миненсә, түбәнгә тәгәрәү - бөттө, юғарыға күтәрелә башлау мәле етте.

### Тормошта һеҙҙең өҫтөнлөктәр ниндәй?

• Ғаиләле булыу һәм донъяны танып белеү.
• Белем.
• Хәҡиҡәт.
• Ғаилә, эш.
• Мөхәббәт, дуҫлыҡ, тоғролоҡ, ышаныс, намыҫ.
• Кешеләрҙең яҡшы мөнәсәбәте. Һулпән булмау. Тормош ауырлыҡтарын ижади енеп сығыу.
• Тормош күнелдә иләсләндерер хистойғоларға бай, тулы, ҡыҙыҡлы булырға тейеш.
• Әлегә белмәйем.

### Замана йәштәре нимә теләй?

• Тормошта нимәгәләр өлгәшергә һәм онотолмаҫҡа.
• Минә, мәҫәлән, хәүефле аҙым, адреналин кәрәк. Ә донъяға ник тыуҙым, тигәндәй бысҡып йәшәү бөтөнләй ҡыҙыҡ түгел.
• Тулы ҡанлы, ҡыҙыҡлы тормош.
• Үҙ-ара гендер мөнәсәбәттәр һәм хыялдарҙың тормошҡа ашыуын.
• Уҡып кеше булыу. Был донъяла яҡшы исем ҡалдырыу.
• Енси бәйләнештәр, татлы ашау, күңел асып йәшәү.
• Бөтә нәмәнең бушҡа бирелеүен.
• Оло, саф мөхәббәт...
• Байлыҡ булдырып, эшләмәй генә йәшәргә.
• Үҙенде танытырға.

✓ **Кемдер берәйһе: дәүләт булғас, ул аҡса һуғырға тейеш, ә башҡорт аҡсаһы әле табылмаған, тип шик белдерер. Тарихҡа күҙ ташлаһаҡ, аҡса һуғыу дәүләтселек өсөн төп талап булмағанын күрергә була...**



ЫРЫУЫҢ КЕМ?



# САЛАУАТЛЫ КӨҘӘЙ ЫРЫУЫНАН БЕҘ

IX быуат аҙаҡтарында Арал диңгеҙе буйындағы далаларға яңы күскенселәр ағымы - уғыҙҙар, карлуктар һәм кимаҡтар үтеп инә. Улар менән бындағы дала киңлектәрендә элегерәк йәшәгән ҡәүемдәр араһында бәрелештәр башлана. Тарихи сығанаҡтарҙа әле аталған уғыҙ союзына ҡаршы бәшнәк, башҡорт, баджна (йәиһә яджна) һәм нәүкердә тип аталған ырыу-ҡәбиләләр коалицияһының барлыҡҡа килеүе, әммә ҡаты алыштарҙа еңелеүгә дусар булыуы хаҡында мәғлүмәттәр бар. Бәшнәк союзы көнбайышҡа табан йүнәлеп, Ҡара диңгеҙҙең төньяҡ тарафындағы ерҙәрҙе баҫып ала, бында элегерәк килгән венгрҙар (мадъярҙар) Паннонияға китергә мәжбүр була. Ошо бәшнәк союзы яугирҙары Константинополгә һөжүм итә һәм уны ҡамауҙа тота. X быуаттың ғәрәп тарихсыһы әл Мәсғүди ошо хаҡта былай тип яҙа: "Былар Баджнак, Яджна, Баджгурд һәм Наукерда ҡәбиләләре. Был 320 йылдан (Раштыуанан һуң 942 йыл. - ***Ред.***) һуң булды. Улар унда үҙҙәренең палаткаларын (тирмәләрен. - ***Ред.***) ҡороп, әл Кустантинийана Румийаға тиклемге юлды япты".

Әммә Ҡара диңгеҙ тарафтарына барса бәшнәк һәм башҡорт ҡәбиләләре лә китмәй. Тороп ҡалған бәшнәктәр 22 ырыуҙан хасил булған уғыҙ союзына буйһона. Ә был яҡтарҙа ҡалған башҡорт ырыуҙары Аралдан китеп, Көньяҡ Урал ерлегендә көн итә башлай, уғыҙ ябгуларына яһаҡ түләп, әммә үҙаллы көн итеүсе ҡәүемдәре рәтендә була. Ошо ваҡиғалар тураһында XIV быуатта фарсы тарихсыһы Рәшид ад-Дин тарафынан яҙып алынған "Огуз-наме" эпосының бер вариантында бына нисәр теркәлгән: "... Курал һәм Башгурд иле хаҡында әйткәндә, уларҙың кешеләре буйһонмаусан һәм мәкерле халыҡ ине. Үҙҙәренең һауалығы һәм ғорурлығы арҡаһында улар бер ниндәй хакимға ла баш эймәҫ булдылар. Шунан Уғыҙ уларҙың Ҡарашит исемле батшаһын әсир алды. Шунан һуң Курал һәм Башгурд ил ителделәр һәм яһаҡ түләргә риза булдылар". Әммә Көньяҡ Урал тарафтары Уғыҙ империяһының үтә алыҫта ҡалған провинцияһы булып, уның ниндәй ҙә булһа баҫымҡыҫымынан азат була. XI быуатта башланған ҡыпсаҡ экспанцияһы Уғыҙ империяһының төньяҡ өлөшөн үҙ ҡарамағына буйһондора. Ә X быуат башында (922 йыл) ибн Фаҙлан күргән башҡорттар үҙаллы халыҡ булып танылып, Бөйөк Булғар ханлығы менән союздаш Башҡорт илен тәшкил итә.

Бәлки, уғыҙҙар составына ингән көҙәйҙәр ҙә, тәүгеләре ҡыпсаҡтар тарафынан тар-мар ителгәс, төньяҡҡа китеп, Көньяҡ Урал ерлегендә электән көн иткән башҡорт ырыуҙарына килеп ҡушылғандыр? Тап ошо осорҙа улар уғыҙ миграцияһы ағымына эләккән әйле, байлар һәм һарт ырыуҙары менән бер ерлектә күсә килеп, әлеге йәшәгән төйәктәренә яҡынлашҡан булыуҙары мөмкин, тигән фараз да бар.

Р.Ғ. Кузеев көҙәйҙәрҙең башҡа башҡорт ырыуҙары менән боронғо бәйләнеше хаҡында үҙ версияһын тәҡдим итә. Юғарыла бәйән ителгәндәрҙән сығып, ул көҙәйҙәрҙең ул саҡта баджгардтар тип аталыусы ҡәбиләләр менән берлектә Саян-Алтай тарафтарынан Төньяҡ Кавказғаса күсеп барып, һуңынан баджгард-бурджандарҙың этник хәрәкәте составында Урал алды ерҙәренә килеп етеүен фаразлай. Тәүҙәрәк Ыҡ йылғаһы үҙәнендә, Минзәлә яҡтарында, аҙаҡҡараҡ Асылыкүл буйҙарында йәшәгән осорҙа көҙәйҙәр үҫәргән, түңгәүер, бөрйән ырыуы башҡорттары менән тығыҙ бәйләнешкә инә. Көҙәй ырыуы бүлемдәренең бүре, сураш, тама, тау кеүек атамалары ошо фекерҙе дәлилләп тора.

XIII-XIV быуаттарҙа көҙәйҙәр Ағиҙел йылғаһының һул яры буйҙарында көн итә. Ошо осорҙа улар был тарафтарға килеп еткән ҡыпсаҡ ырыуҙарының йоғонтоһона эләгә, тап ошо ваҡытта уларҙың составына төркмән-ҡыпсаҡтар ҡушылып, төркмән-көҙәй ырыу бүлеме хасил була. Көҙәйҙәр араһында таҙлар ҙа шул уҡ осорҙа пәйҙә була. Таҙлар ошоға тиклем дә Ҡатай һәм Йүрүҙән йылғалары буйында йәшәүсе айырым үҙаллы төркөмдө тәшкил итеп, XVIII быуатта ғына ошонда заводтар күпләп төҙөлә башланыу сәбәпле үҙ ерҙәренән ҡыҫырыҡлап сығарылып, төньяҡ-көнсығыш башҡорттарына ҡушылып китә.

XIV быуат аҙағында көҙәйҙәр Ҡариҙел (Өфө) йылғаһы тамағынан алып көньяҡҡа табан Ағиҙел йылғаһының урта ағымында ике яҡ яр буйындағы ерҙәрҙе биләй. Бында улар мең ырыуы башҡорттары менән тығыҙ аралаша башлай. XIV быуат аҙаҡтарында - XV быуат башында нуғай экспанцияһы арҡаһында меңдәр ҙә, көҙәйҙәр ҙә Ағиҙелдең уң яғына сығып йәшәй башлай һәм уларҙың байтағы яңы урындарға күсенә. Көҙәйҙәрҙең бер өлөшө Ҡариҙел йылғаһының түбәнге ағымындағы урманлы ерҙәрҙә төпләнә, ҡалғандар Эҫем йылғаһы буйлап үргә табан йүнәлә, һуңғараҡ Йүрүҙән һәм Ләмәҙ буйҙарына килеп етә. Эҫем йылғаһының түбәнге ағышында, Ҡариҙел буйында йәшәүсе урман- һәм бүләкәй-көҙәйҙәр мең ырыуы башҡорттары менән йыш никахлашып-туғанлашып йәшәй башлай. Йүрүҙән буйындағы шайтан- һәм ҡыр-көҙәй ырыуы башҡорттары урындағы әйле ырыуҙары менән бәйләнешкә инеп, уларҙың телендә (һөйләшендә) булған уртаҡлыҡ, мәҙәни яҡтан оҡшашлыҡ та арта бара.

Этногенетик тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһендә көҙәй ырыуы вәкилдәренең төп генетик маркеры R1a-M198 гаплотөркөмө икәнлеге асыҡланды. Көҙәйҙәргә ошо гаплотөркөмдөң аныҡ билдәләнгән һәм бик һирәк осрай торған субклады (тармағы) хас, ул, башлыса, башҡорттар араһында таралған. Ошо генетик линияға шулай уҡ табын, унлар, балыҡсы, танып, ҡошсо, әйле, ҡатай, дыуан-әйле ырыуҙары ҡарай. Был факт ошо ырыуҙар вариҫтарының, алыҫыраҡ булһа ла, үҙ-ара генетик нәҫелдәшлеген раҫлаусы дәлил булып тора.

Көҙәй ырыуының бөгөнгө вариҫтары, башлыса, Башҡортостандың Салауат, Нуриман, Иглин райондарында ойошоп йәшәй. Шулай уҡ Белорет районының Мулдаҡай һәм Исҡушты, Учалы районының Һөйәрғол ауылдарында ла көҙәй ырыуы тоҡомдары бар. Силәбе өлкәһенең Әшә, Усть-Катав, Сим, Миньяр, Катав-Ивановск, Йүрүҙән ҡалаларында, Арғаяш районының Нәҡәй ауылында әле лә көҙәй ырыуы вәкилдәрен осратып була.

Көҙәй башҡорттары данлы ир-аҙаматтары, билдәле ҡатын-ҡыҙҙары менән хаҡлы рәүештә ғорурлана. 1735-1740 йылдарҙа барған оҙайлы башҡорт ихтилалында Ҡыр-Көҙәй батыры Төлкөсура Алдағолов, шул уҡ олоҫ муллаһы Юлдаш Һөйәрембәтовтар етәкселегендә башҡорт яугирҙары батша карателдәре менән йән аямай алышһа, 1773-1775 йылдарҙа Емельян Пугачевтың казак-крәҫтиән армияһы бригадиры, Шайтан-Көҙәй ырыуының йорт старшинаһы улы Салауат Юлаев башҡорт халҡының азатлыҡ көрәше символына - милли батырыбыҙ дәрәжәһенә күтәрелә.

Совет осоронда көҙәй ырыуы башҡорттары Башҡортостандың иҡтисади, ижтимағи, рухи үҫешенә тос өлөш индерҙе, улар араһынан илебеҙҙә, республикабыҙҙа танылған шәхестәр үҫеп сыҡты. Билдәле революционер, дәүләт эшмәкәре Баһаутдин Нуриманов, дәүләт эшмәкәре, 1930-1935 йылдарҙа БАССР-ҙың мәғариф наркомы Риза Әбүбәкеров, Советтар Союзы Геройҙары Ғәйфетдин Аскин, Ғимай Шәйхетдинов, башҡорт драматургияһына нигеҙ һалыусы Сәғит Мифтахов, яҙыусы Ғайнан Хәйри, СССР-ҙың халыҡ уҡытыусыһы, РСФСР-ҙың маҡтаулы нефтсеһе, РСФСР Юғары Советы рәйесе урынбаҫары Мәғрифә Мәүлетова, танылған йырсы, ӨСИ профессоры Мәжит Алкин, 1960-1980 йылдарҙа Баштелерадио рәйесе урынбаҫары Ғата Имаев, БАССР-ҙың һәм РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Роза Кәримова, Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ артисткаһы Сәүиә Сираева, биология фәндәре докторы, профессор Вәкил Ширәев, медицина фәндәре докторы, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең атҡаҙанған табибы Мәхмүзә Ғәйнуллина, юридик фәндәр докторы, РФ Федераль Йыйылышының Федерация Советы ағзаһы Рафаил Зинуров һәм башҡа бик күп зыялыларыбыҙ, үҙҙәренең фиҙаҡәр хеҙмәте һәм ижади ҡаҙаныштары менән көҙәй башҡорттары данын бар илгә таратты.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**
**(Аҙағы. Башы 43-сө һанда).**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ



# БОРОНҒО БАШҠОРТ ДӘҮЛӘТСЕЛЕГЕ

Бей тигәндә, беҙ урыҫ кенәздәрен иҫкә төшөрәйек. Урыҫ кенәзлектәре дәүләтселек тип иҫәпләнә. Ул кенәзлектәрҙең башлыҡтары (кенәздәре) баш кенәзгә буйһонғандар. Бында ла шул уҡ, әле үрҙә әйтеп киткән баш сюзерен һәм вассалдар мөнәсәбәтен күрергә була. Урыҫ кенәздәре үҙҙәренең вазифалары, йәмғиәттә тотҡан урындары менән төрки халыҡтарҙың бейҙәре менән тап килә. Уғыҙ-төрөктәрҙең тарих фәненә билдәле бейлектәре - дәүләт, тип иҫәпләнә. Төрөк бейҙәре үҙҙәренең эреле-ваҡлы бейлектәре менән ҡуша төрөк солтанына буйһона. Ҡыҙыҡ хәл. Урыҫ кенәзлектәре лә, төрөк бейлектәре лә фәндә дәүләтселек билдәһе тип ҡабул ителгәндәр, ә башҡорт бейҙәре һәм уларҙың ҡулы аҫтында булған бейлектәр ҙә, улар буйһонған хандар ҙа, ни сәбәптәндер, башҡорт дәүләтселеге тураһында һүҙ алып барғанда иҫәпкә алынмай, әйтерһең дә, улар тарихта бөтөнләй булмаған. Был бер нисек тә аңлатып булмаған, логикаға һыймаған ике йөҙлө стандарт була түгелме һуң? Башҡорт телендә дәүләт атрибутикаһына ҡараған бихисап терминдар һаҡланып, әле лә әүҙем ҡулланыла. Мәҫәлән, хан, бей, тархан, батыр, яугир, бағауыл, хөкөм, аҡса (һум, тин) һәм башҡа шундай терминдарҙы әйтеп китергә була. Терминдар йәки һүҙ ниндәй ҙә булһа берәй күренеш йәки ниндәйҙер нәмә халыҡ тормошонда барлыҡҡа килгән осраҡта ғына барлыҡҡа килә, ә ул күренеш йәки нәмә юҡ икән - һүҙ үҙе лә юҡ. Был - телдең барлыҡҡа килеү һәм үҫеү ҡанунының төп талаптарының береһе. Тимәк, дәүләтселеккә ҡараған терминдар телебеҙҙә барлыҡҡа килгән икән, улар аңлатҡан йәмғиәт күренештәре лә халыҡ тормошонда барлыҡҡа килгән һәм халыҡ телендә үҙҙәрен аңлатыусы һүҙҙәрҙе лә талап иткәндәр, тыуҙырғандар, тип аңларға кәрәк.

Кемдер берәйһе: дәүләт булғас, ул аҡса һуғырға тейеш, ә башҡорт аҡсаһы әле табылмаған, тип шик белдерер. Тарихҡа күҙ ташлаһаҡ, аҡса һуғыу дәүләтселек өсөн төп талап булмағанын күрергә була: боронғо дәүләттәрҙең ҡайһы берҙәрендә аҡса һуҡмайынса, уларҙа аҡса урынына йәнлек тиреләре, мал, аҫыл таштар ҡулланылған. Телебеҙҙә иң бәләкәй аҡса берәмеген аңлатҡан, әле лә ҡулланылған тин һүҙе үҙенең барлыҡҡа килеүе менән тейенгә бурыслы. Хәҙерге әҙәби телебеҙҙә "тейен" тип аталған тиреһе матур, бәләкәй генә йәнлек боронғо ата-бабаларыбыҙ телендә "тиин" тип аталған, һәм был йәнлектең тиреһе алыш-биреш итеү өсөн ҡулланылған булған. Тора-бара был тиин һүҙе тингә әйләнеп киткән, аҡса берәмеген аңлата башлаған.

Ҡайһы бер халыҡтар, мәҫәлән, боронғо кельттар, киреһенсә, дәүләтһеҙ көйөнсә лә аҡса һуҡҡандар. Африкалағы ҡайһы бер илдәрҙәге ҡәбиләләр үҙ-ара сауҙала, алыш-биреште аҡса урынына әле лә эре-эре ябай таштарҙы ҡулланалар. Алтын-көмөшкә, ҡиммәтле йәнлек тиреһенә бай Уралда йәшәгән башҡортҡа, бәлки, аҡса һуғып тороуҙың кәрәге лә булмағандыр. Хәҙерге Ғәрәбстан, Төркиә, Ҡара диңгеҙ буйҙарында, Көнбайыш Европа, Скандинавия илдәрендә табылған алтын-көмөш әйберҙәрҙең химик составын тикшергән ғалимдар уларҙың ҡайһы берҙәренең Уралда сығарылған алтын-көмөштән эшләнгәнен асыҡланылар. Тимәк, беҙҙең халыҡта аҡса урынына алтын, көмөш файҙаланылған, һәм төрлө алыш-биреш, сәйәси, хужалыҡ бәйләнештәре мөлендә баяғы илдәргә барып юлыҡҡандар, тип әйтергә урын бар.

**Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.**
**(Дауамы бар).**

**✓ Яңы ғына вуз тамамлаусы йәштәр араһында ла миграцион әүҙемлек көслө: йәш белгестәр үҙ теләктәренә һәм мөмкинлектәренә ярашлы эш урынын республиканан ситтә эҙләргә әүәҫ.**



# ЕГЕТТӘР ҘӘ,

## сит яҡтарға

**2020 йылда уҙғарыласаҡ Бөтөн Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу кампанияһына теүәл бер йыл ваҡыт ҡалды. Уның һөҙөмтәләренән Рәсәй халыҡтарының демографик хәле буйынса байтаҡ күрһәткестәр билдәле буласаҡ, улар артабанғы социаль-иҡтисади торошобоҙҙо ғилми нигеҙҙә көйләй алыу мөмкинлеген бирәсәк. Халыҡ иҫәбен алыу граждандарҙың ил эсендә бер урындан икенсе ергә күсеп йөрөүенә, йәғни миграцияға ҡағылышлы проблемаларға ла бер ни тиклем киммәлдә асыҡлыҡ индерәсәк. "Киске Өфө" гәзитенең быйылғы 38-се һанында Рәсәй Фәндәр Академияһы Федераль социологик ғилми тикшеренеүҙәр үҙәгенең Өфө филиалы директоры Рим Вәлиәхмәтовтың ошо проблемаға арналған "Ниңә китәләр… тыуған ерҙәрҙе ташлап?" исемле мәҡәләһе баҫылғайны. Ошо тема буйынса һөйләшеү билдәле башҡорт социологы Р.М. Вәлиәхмәтов етәкләгән ғилми үҙәк хеҙмәткәрҙәре - ойошманың ғилми секретары Гүзәл Баймырҙина, өлкән ғилми хеҙмәткәр Марсель Тураҡаев, Башҡортостанстаттың халыҡ һәм һаулыҡ һаҡлау статистикаһы бүлеге начальнигы Ирина Үтәшева ҡатнашлығында дауам итте.**

**Һуңғы йылдарҙа республикабыҙҙа халыҡ миграцияһы мәсьәләләре йәмәғәтселектең дә, власть органдарының да иғтибарынан ситтә ҡалмай. Ни өсөн кешеләр тыуған-үҫкән яҡтарын ташлап китә, йә булмаһа, эш урынын сит-ят ерҙәрҙә эҙләй башлай?**

**Г. Баймырҙина:** Миграция - тәбиғи процесс, халыҡтарҙың бер ерҙән икенсе бер тарафҡа күсеп китеүе бик борондан замандарҙан уҡ күҙәтелгән күренеш. Күскенселек тарихы ошоға миҫал булып тора. Кешеләргә һәр заманда ла йәшәр өсөн уңайлыраҡ ерҙәрҙе эҙләү хас булған.

**Балыҡ һыуҙың тәрәнен, кеше йәшәр урындың яҡшыһын һайлай, тиһегеҙ инде.**

**Г. Баймырҙина:** Тап шулай, тәбиғәттә балыҡтар миграцияһы ла бар бит.

**И. Үтәшева:** Миграция - иҡтимағи-иҡтисади күренеш, уның сәбәптәре лә төрлөсә булыуы мөмкин, әммә тарихи яҡтан ҡарағанда, ул теге йәки был дәүләт алып барған сәйәсәт менән дә бәйле. Дәүләт ҡарары менән бер көн эсендә ил сигенең ябылып ҡуйылыуы ла мөмкин бит. Аллаға шөкөр, беҙҙә күҙәтелгән миграция иҡтисади сәбәптәр менән аңлатыла, ситтән республикабыҙға килгән мигранттар ҙа ошонан башҡаны күрһәтмәй, һуғыш хәрәкәттәре йәиһә сәйәсәт менән бәйле күсеп килеүселәр беҙҙә юҡҡа иҫәп. Башлыса, миграция сәбәптәре эш урыны, уҡыу, ғаилә хәле һәм башҡа шәхси ихтыяждар менән бәйле. Уны тыныс, ғәҙәти шарттарҙа тыуған социаль-иҡтисади миграция, тип атарға кәрәк.

**Тыныс шарттарҙа кемдер беҙҙең республикабыҙҙан ситкә китә, ә кемдәрҙер килә тора. Үҙенә күрә алыш-биреш процесы булып сыға инде?**

**И. Үтәшева:** Бына, әйтәйек, кемдер Башҡортостандан Мәскәүгә китә. Киреһенсә, шул уҡ Мәскәү ҡалаһынан беҙҙең республикабыҙға йәшәргә килеүселәр ҙә бар: уларға бында йәшәүе ҡулайыраҡ. Ғөмүмән, эске миграция иҡтисади ситуация менән ныҡ бәйле, ә ул төрлө субъекттарҙа төрлөсә. Әйтәйек, кемдер бер төбәктән икенсе төбәккә күсеп китә икән, ул быны үҙ теләгенә ярашлы эшләй, миграция сәбәптәрендә шәхси ихтыяждар өҫтөнлөк итә.

**Матбуғат сараларында, интернет селтәрҙәрендә йыш ҡына республикабыҙҙағы миграция буйынса күрһәткестәр, ошо процестар буйынса һандар нисбәте килтерелә. Уларға иғтибар итһәң, ниндәйҙер хәүефле күренешкә тап булғандай тойола: хеҙмәт миграцияһында йыл эсендә Башҡортостандың 160 мең кешеһе ҡатнашһа, 40-45 мең кеше бөтөнләйгә ситкә китә икән, тигән мәғлүмәт тә бар. Был хәлдә нисек аңлатырға була?**

**И. Үтәшева:** Эйе, сентябрь айында ошо хаҡта бер нисә сығыш булды. Әле ошо көндәрҙә уҙған кәңәшмәлә Башҡортостанстат директоры Әкрәм Ғәниев ҡайһы бер журналистарҙың ошо күрһәткестәрҙе тейешле аңлатма бирмәйенсә генә килтереүе аңлашылмаусылыҡ тыуҙыра, тип билдерҙе. Бына миҫал өсөн 2019 йылдың тәүге яртыһында Башҡортостанда 66,5 мең кешенең миграцияла ҡатнашыуы хаҡындағы мәғлүмәтте алайыҡ. Был күрһәткескә дөйөм миграция ағымында теркәлеү үткән барса кеше ингән. Ошо күрһәткесте дөрөҫ баһалау өсөн дөйөм миграция ағымының структураһын да иҫәпкә алырға кәрәк, уға төбәк-ара һәм халыҡ-ара миграциянан башҡа төбәк эсендәге миграция ла инә. Республика халҡының миграцион кәмеүе-артыуына республика эсендәге миграция йоғонто яһамай. Ә беҙҙә эске миграция, йәғни республика ауылдарынан үҙебеҙҙең ҡалаларға, бер ҡаланан икенсе ҡалаға күсеүселәр дөйөм миграция ағымының 70 процентын тәшкил итә, был Рәсәй субъекттары араһында бик юғары күрһәткес. Ә республикабыҙҙан ситкә китеүселәрҙең йыллыҡ күрһәткесе 27 мең кеше самаһы. Тап шуның өсөн журналистарыбыҙға беҙҙең миграция буйынса таблицаларҙағы күрһәткестәрҙе ентекләберәк ҡарап баһалау фарыз.

**Ә бына хеҙмәт миграцияһы хаҡында ни әйтер инегеҙ?**

**И. Үтәшева:** Миграция статистикаһында йәшәгән урынын алмаштырыусылар ғына иҫәпкә алына, ә вахта ысулы менән республиканан ситкә йөрөп эшләүселәр миграция буйынса рәсми статистикаға индерелмәй. Улар республикала даими йәшәүселәр иҫәбенән сығарылмай, вахтасыларҙың эш урыны ғына республиканан ситтә. Республика сигендә йәшәүселәрҙең бер өлөшө йәнәштәге өлкәләрҙә эш урыны тапһа, шунда барып эшләп йөрөй, быны миграция күренеше тип атаһаҡ та, ул бик ҡыҫҡа сроклы миграция була. Мәҫәлән, байтаҡ ҡына кеше Магнитогорск ҡалаһына эшкә барып-ҡайтып йөрөй, быны беҙ маятник рәүешендәге миграция, тип нарыҡлай алабыҙ. Әлбиттә, эш урындары республиканан ситтә булып, йәшәгән төйәгенән оҙайлы срокка күсеп китмәгән кешеләр ҙә иҫәпкә алына, улар халыҡ иҫәбен алған саҡта теркәлә, эшсе көстәр буйынса ресурстарҙы барлаусы документтарҙа иҫәпкә алына. Бына уларҙың йыл буйына иҫәпкә алынған дөйөм һаны республика кимәлендә 140-160 меңгә етеүе мөмкин. Әйтергә кәрәк, ситкә йөрөп эшләүселәр Себер тарафтарына ғына китмәй хәҙер, Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларына, Татарстанға, Краснодар крайына йөрөп эшләүселәр күбәйҙе. Ваҡытлыса хеҙмәт миграцияһы, тип әйтһәк тә, был социаль-иҡтисади күренеш рәсми миграция буйынса иҫәпкә инмәй, вахтасыларҙы мигрант тип атап та булмай. Әгәр кеше элек йәшәгән урынынан иң кәмендә 1 йылға һәм унан да оҙайлыраҡ ваҡытҡа китә икән, ул халыҡ-ара статистика нормалары буйынса мигранттар иҫәбенә инә.

**Йәшәгән төйәгенән ситкә китеүселәр араһында төрлө йәштәге кешеләр булыуы мөмкин. Йәш яғынан ҡарағанда, миграция процестарында ниндәй йәштәге кешеләр өҫтөнлөк итә?**

**М. Тураҡаев:** Ошо йәһәттән иң тәүҙә яңы ғына мәктәпте тамамлаусы йәштәрҙе телгә алырға була. Хәҙерге осорҙа башҡа ҡалаларға китеп белем алыусылар күбәйә бара, быны уҡыу миграцияһы, тип атайҙар. Ғөмүмән, рәсәйлеләр өсөн сит ҡалаларға уҡырға китеүҙе иң тәүге миграция тәжрибәһе туплау, тип әйтергә булалыр. Ә миграцияның йәш структураһын иғтибарлап ҡараһаң, йәшерәк быуындарға ҡараған төркөмдәр өҫтөнлөк итә. Кеше ни тиклем йәшерәк булһа, уны башҡа бер тарафтарға сығып китеүҙән тотҡарлаусы факторҙар әҙерәк була. Йәштәр өйләнмәгән булһа, бала-сағаһы булмаһа, улар үҙҙәренә оҡшаған, яҡшыраҡ эш урынын таба алырҙай төбәкте һайлай башлай. Яңы ғына вуз тамамлаусы йәштәр араһында ла миграцион әүҙемлек көслө: йәш белгестәр үҙ теләктәренә һәм мөмкинлектәренә ярашлы эш урынын республиканан ситтә эҙләргә әүәҫ, сөнки йыш ҡына бында уларҙы ҡәнәғәтләндергән эш урынын табыу мөмкин булмай. Кеше бер урында ни тиклем оҙаҡ йәшәһә, шул тиклем ошонда ерегә, ғаилә ҡора, эшләй, ҡуйған маҡсаттарына өлгәшә. Шуның өсөн олораҡ быуын кешеләре сит-ят ерҙәргә күсеп китергә ашҡынып тормай. Ә йәштәрҙең йәшәү рәүеше икенсерәк, улар ҙур ҡалаларға барып йәшәргә ынтыла, ундағы мөхит ҡыҙыҡлыраҡ, үҙҙәренә генә хас ихтыяждарын да ҡәнәғәтләндерә алыу мөмкинлеген ситтә тиҙерәк таба йәштәр.

**Ә бына бында бер парадоксаль ситуация килеп сыға: республика етәкселәре һәр саҡта ла йәштәребеҙҙең башҡа ҡалаларға китеп белем алыуын хуплай, киләсәктә юғары квалификациялы белгестәр кире ҡайтып, республикабыҙҙа эшләр, тип иҫәпләй. Ситкә уҡырға китеүселәр байтаҡ, ә уҡыуҙарын тамамлаған йәштәребеҙ тыуған яҡтарына ҡайтырға ашҡынып тормай, Мәскәүҙә, Санкт-Петербургта, башҡа ҡалаларҙа тороп ҡалыу яғын ҡарай. Республикабыҙ вуздарында белем биреү сифаты хөртөрәкме әллә, тигән фекер ҙә тыуа. Был ситуацияны нисек аңлатыр инегеҙ?**

**М. Тураҡаев:** Юҡ-юҡ, бында эш белем биреү сифатында ғына түгел. Республика вуздарында бюджет иҫәбенә белем алыу мөмкинлеге һуңғы йылдарҙа ныҡ ҡына кәмене. Шул уҡ Өфө мәктәптәрен тамамлаусы йәштәребеҙ республиканың юғары уҡыу йорттарына инеүгә ҡарағанда Мәскәү, Санкт-Петербург вуздарына инеү еңелерәк, тип әйтә. Был ысынлап та шулай. Рәсәйҙең ҙур ҡалаларындағы вуздар юғарыраҡ статусҡа эйә, уларҙа уҡытыу кимәле лә юғары, бюджет иҫәбендәге урындар күберәк, ҡай сағында конкурс та түбәнерәк була. Ә республика вуздарына, башҡа вуздар менән конкурентлы булыр өсөн, абитуриенттарҙың ихтыяждарына тап килгән яңы йүнәлештәр буйынса белгестәр әҙерләү, бюджетлы урындарҙы арттырыу мәсьәләһен хәл итеү зарур. Ә ситтә вуз тамамлаусы йәштәребеҙ ундағы шарттарға ҡулайлаша, унда булған иҗтимағи-мәҙәни уңайлыҡтарға күнегеп китә, тығыҙ аралашып йәшәгән дуҫ йәштәштәре мөхитенән айырылғылары килмәй, белеменә тура килгән эш урыны ла тиҙерәк табыла. Мәскәү, Санкт-Петербург, Ҡазан ҡалаларында уҡыған йәштәрҙең үҙ иҗтимағи төркөмдәре барлыҡҡа килде, улар йыл һайын интернет селтәрҙәре аша республикабыҙ мәктәптәрен тамамлаусыларҙы үҙ вуздарына саҡыра, аңлатыу эштәрен алып бара, яңы килеүселәргә ярҙам ҡулын һуҙа. Әлбиттә, бындай мөхит егет-ҡыҙҙарыбыҙҙы ылыҡтырып тора.

**Ә бит ошо сит ҡалаларҙа уҡып сығып, унда тороп ҡалған йәш быуын республикабыҙ өсөн "юғалтылған быуын"ға әйләнә түгелме һуң?**

**М. Тураҡаев:** Юҡ, мин быны улай уҡ итеп баһаламаҫ инем. Уларҙы юғалған тип, иҫәптән сығарыу дөрөҫ булмаҫ ине. Башҡортостандың үҙ плюстары ла етерлек бит. Сит тарафтарҙа уҡыған йәштәр тыуған яҡтарын онотмай, йыш ҡайтып йөрөйҙәр, һағынып һөйләйҙәр һәм яҙалар, бәғзе береүҙәре, мөмкинлек табылһа, тыуған еренә ҡайтып, эш башлай. Дөйөм алғанда, бында уларҙың белемдәренә, мәнфәғәттәренә ярашлы эш урындарын күберәк булдырыу тураһында уйланырға ваҡыт. Беҙҙең Өфө ҡалаһы был йәһәттән әлегә арттараҡ ҡала килә, бындағы шарттар Мәскәү, Санкт-Петербургтан ғына түгел, Һамар һәм Ҡазан ҡалаларынан да ҡайтышыраҡ. Баш ҡалабыҙҙа ылыҡтырғыс шарттар булдырыла икән, бик күптәр кире ҡайтырға әҙер.

**И. Үтәшева:** Ил буйынса миграцион артыу-кәмеү нисбәтен ҡараһаҡ, минусҡа төшмәгән 10 төбәкте лә табып булмаясаҡ. Йәштәрҙең Санкт-Петербургҡа йә Мәскәүгә юлланыуын мин "көнбайыш дрейфы", тип атар инем. Был Башҡортостанға ғына хас күренеш түгел, күршебеҙ Татарстандан да күпләп ситкә китәләр. Унда ла, башҡа күп субъекттарҙа ла миграцион кәмеү күҙәтелә бөгөн. Шул уҡ Ҡаҙан ҡалаһынан уҡырға киткәндәр ҙә уҡыуҙарын тамамлағас, кире ҡайтырға ашҡынып тормай. Йәштәр өсөн шул уҡ Мәскәү, Санкт-Петербург старт майҙансығына әүерелде, бында тәжрибә туплағандар халыҡ-ара хеҙмәт баҙарына сығыу мөмкинлегенә эйә була. Ошо мегаполистарҙа ғына башҡа урындарҙа булмаған һөнәрҙәр буйынса профессиональ белем алырға була. Ә беҙҙәге профессиональ уҡыу йорттарының күбеһе элекке, совет осоронан ҡалған структураға ярашлы эшләй, консерватизм көслө, заманса технологизация процестары яй бара. Әлбиттә, заманса белем алған йәштәргә үҙ һөнәрҙәре буйынса тыуған яҡтарында эш табыуы ауыр. Рәсәй төбәктәренән уҡырға ситкә киткәндәрҙең күбеһе шулай уҡ эш урындарын башҡа тарафтарҙа табырға тырыша. Быны барса төбәктәргә лә хас дөйөм тренд итеп ҡабул итергә кәрәк. Әммә барыһы ла әле һүҙ барған мегаполистарҙа ғына йәшәй һәм эшләй ала, тигән фекер менән дә килешеп булмай. Унда бөтөнләйе менән икенсе мөхит, кешеләр һәр саҡта ла ҡайҙалыр ашыға, йәшәйеш темпы кешенән көслө энергетика талап итә - был барыһына ла

✓ ***Беҙҙең иҫәпләүҙәргә ҡарағанда, 2012 йылдан 2019 йылға тиклем миграция арҡаһында тыуымай ҡалған балалар иҫәбенә республика 16-20 меңләп кешеһен "юғалтҡан". Бәләкәйерәк булһа ла, бер ҡала халҡы бит был!***

# ҠЫҘҘАР ҘА... китмәһен!

оҡшап етмәй. Ә бына яңы, мәҫәлән, IT-технологияларын яҡшы үҙләштергән белгестәр шул уҡ Мәскәү компанияларында Өфөлә йәшәп тә эшләй ала. Киләсәктә дистанцион хеҙмәт итеү арта барасаҡ, тип уйларға кәрәк. Мәскәүҙә йәшәп, республика өсөн эшләргә була заманса технологияларҙы ҡулланғанда.

**Г. Баймырҙина:** Ә заманса технологияларға ҡоролған эш урындарын кем булдырырға тейеш һуң? Был республика кимәлендәге ҡатмарлы мәсьәлә, һәм етәкселектән башҡа, ошо юҫыҡта ла әүҙем кешеләр талап ителә. Бына беҙ кешелек потенциалы, тибеҙ, әммә әлегә беҙҙә яңыса эшләй алған белгестәр, компаниялар, ойошмалар юҡҡа иҫәп.

**Әйтергә кәрәк, республика етәкселеге алышынғас, көнүҙәк, ҡырҡыу проблемалар буйынса фекер алышыу башланды, шул иҫәптән, республикабыҙҙың төп капиталын - хеҙмәт ресурстарын һөҙөмтәле файҙаланыу ҙа мөһим бурыстарҙың береһе итеп ҡуйылды. Республика Башлығы Радий Хәбиров иглан иткән стратегик программа, йәғни "Үҫештең беренсе биш йыллығы", тип аталған документта ла был хаҡта әйтелә. Алдынғы йәштәребеҙ үҙ республикаһында инициатива күрһәтеп, яңы башланғыстарға юл яра алырмы һуң? Мәскәүҙә лидерҙар былай ҙа күп, уларға республикала мохтажлыҡ ҙур.**

**И. Үтәшева:** Башҡортостандың 2024 йылға тиклемге үҫеш стратегияһы - төптән уйланылған, үтә мөһим документ, унда билдәләнгән маҡсаттар тормошҡа ашыр, тип ышанабыҙ. Әммә йәштәр араһында ла тейешле мәғлүмәти сәйәсәт алып барылыуы зарур. Барыһын да тик аҡсаға ғына бәйләп булмай бит, тормошобоҙҙа әхлаҡи, патриотик фактор ҙа ҙур урын тота. Йәштәр араһында үҙеңдең белемеңде, интеллектуаль потенциалыңды, йәшлек энергияһын үҙеңдең тыуған яғыңда һөҙөмтәле файҙалана алыу хаҡында ла һүҙ алып барыу кәрәктер.

**М. Тураҡаев:** Әйтергә кәрәк, ситтә эшләгәндәрҙең күбеһе юғары позиция биләмәй, шул уҡ Мәскәү һәм Санкт-Петербургта уларҙың вазифалары артыҡ маҡтанырлыҡ түгел. Ошондай йәш белгестәр Башҡортостанда юғарыраҡ постарға дәғүә итә ала, әммә бында әлеге матди фактор өҫтөнлөк итә: бәләкәй вазифала эшләп тә, улар беҙҙәгенән күпкә юғарыраҡ эш хаҡы ала. Улар фирмаларҙа бер ниндәй ҙә креативлыҡ, ижади башланғыстар талап ителмәгән ябай белгестәр, клерк, офис хеҙмәткәрҙәре, һатыусы кеүек вазифаларға ла риза. Әлбиттә, бындай мөхиттә кешелә лидерлыҡ сифаттары барлыҡҡа килмәй инде. Лидер булыу өсөн билдәле кимәлдә конкуренция булған мөхиттә еңеп сыға алыу фарыз.

**И. Үтәшева:** Ә юғары белемле кадрҙарҙың үҫеш потенциалы бар. Әммә һәр аныҡ кешегә ниндәйҙер аныҡ урындың булыуы ла мотлаҡ бит.

**Эйе, ситтә тороп ҡалған йәштәребеҙ тыуған яҡтарына тартылһын, тиһәк, Башҡортостанда ла иҡтисадты үҙгәртеп ҡороу, етештереү көстәре менән бер рәттән, социаль инфраструктураны модернлаштыра алыу зарур. Был барыһына ла асыҡ бөгөн. Ә бына кешеләрҙең милли сығышы буйынса миграция динамикаһында ниндәйҙәр айырмалыҡтар бармы икән?**

**Г. Баймырҙина:** Беҙҙең социологик тикшеренеүҙәр бына нимәне асыҡланы. Башҡорттар араһында үҙенең тыуған яғын бер ҡасан да, хатта эш урыны булмаған хәлдә лә, ташлап китмәйәсәктәрен белдереүселәр башҡа милләт вәкилдәренә ҡарағанда күберәк. Быны тик тыуып үҫкән ергә булған һөйөү тойғоһо менән генә аңлатып булалыр, тим. Ошондай позицияла тороусы башҡорт йәштәре лә байтаҡ.

**Ә географик принцип буйынса, йәғни ҡала/ауыл зоналары яғынан ҡарағанда, миграция үҙенсәлектәре бармы?**

**Г. Баймырҙина:** Мин быны миграция менән бәйләмәй, халыҡтың хәрәкәтсәнлек (мобиллек) сифаты, тип атар инем. Кешенең белем кимәле, матди хәле ни тиклем юғарыраҡ, ул шул тиклем мобилерәк була бара. Әлбиттә, кешеләр өсөн транспорт саралары менән иркен ҡуллана алыу мөмкинлеге лә мөһим. Башҡортостандың ҙурыраҡ ҡалаларына яҡын йәшәүселәрҙең мобиллеге көслөрәк, 50-60 саҡрымдан ошо ҡалаларға йөрөп эшләүселәр күп хәҙер.

**И. Үтәшева:** Ҡала агломерацияларына, йәғни Өфө, Стәрлетамаҡ, Салауат кеүек сәнәғәт үҙәктәренә йөрөп эшләү мөмкинлеге булған урындарҙан сит тарафтарға китеүселәр ҙә аҙыраҡ. Бына ошондай республика сиктәренән сыҡмаған, шартлы рәүештә "маятник миграцияһы" тип аталған йәшәү формаһы бер ни тиклем кимәлдә миграцион кәмеүгә тотҡарлыҡ яһай. Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш зонаһында Магнитогорск ҡалаһына барып-ҡайтып эшләүселәр ҙә байтаҡ. Әлбиттә, эш урынын табырлыҡ үҙәктәр булмаған төбәктәрҙә миграция процестары арта бара.

Миграция ағымының арта барыуын ниндәйҙер хәүефле күренеш итеп ҡарамаусылар ҙа бар. Шул уҡ ваҡытта уның айырым кешеләр яҙмышына, ғаилә мөнәсәбәттәренә кире социаль-психологик йоғонтоһо булыуын да танырға кәрәктер бит?





**Г. Баймырҙина:** Миграцияны асылынан уҡ зыянлы күренеш, тип әйтеп булмай, ул йәмғиәттә тәбиғи рәүештә барлыҡҡа килә. Әммә миграция күрһәткестәре, лакмус ҡағыҙы төҫлө, төбәктең ылыҡтырғыс булыу-булмауын белдереп тора. Әгәр ниндәйҙер төбәктән китеүселәр һаны килеүселәрҙән күпкә арта бара икән, был халыҡтың миграцион кәмеүенә килтерә. Төбәктең кеше потенциалы ла хөртәйә бара, белгестәр етешмәй башлай, йәштәр - төп хеҙмәт ресурстары аҙая бара, был халыҡтың ирҙәр/ҡатын-ҡыҙҙар һаны буйынса нисбәтенә, йәш структураһына кире йоғонто яһай. Махсус тикшеренеү-иҫәпләүҙәр шуны күрһәтә лә инде, һәм был проблемаға бик етди ҡарау зарур. Етмәһә, репродуктив йәштәге ҡатын-ҡыҙҙарҙың сит яҡтарға юлланыуы республикалағы потенциал тыуым кимәлен байтаҡҡа кәметә. Был осраҡта үлем күрһәткестәрен байтаҡҡа кәметә алған хәлдә лә, тыуымай ҡалған балалар иҫәбенә халыҡтың тәбиғи кәмей барыуы күҙәтелә. Беҙҙең иҫәпләүҙәргә ҡарағанда, 2012 йылдан 2019 йылға тиклем миграция арҡаһында тыуымай ҡалған балалар иҫәбенә республика 16-20 меңләп кешеһен "юғалтҡан". Бәләкәйерәк булһа ла, бер ҡала халҡы бит был! Беҙ башҡа төбәктәр менән сиктәш булған 4 районда миграция кимәлен асыҡлағас, бына нимә мәғлүм булды. Ошо райондарҙа йәшәүсе хеҙмәткә яраҡлы кешеләрҙең яртыһы сит өлкәләргә эшкә китә. Ир-аттар ғына түгел, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа килем алырлыҡ урын артынан китә хәҙер. Был күрһәткестәрҙе бер нисек тә нормаль күренеш, тип атап булмай, бында уйланырға урын бар.

**Ауылдарҙа олораҡ быуын кешеләр менән аралашҡанда ауыл егеттәренә кәләш итеп алырлыҡ ҡыҙҙар булмауы хаҡында йыш зарланалар...**

**И. Үтәшева:** Әлбиттә, социаль-психологик күҙлектән ҡарағанда, миграция ғаиләләрҙең күнегелгән йәшәү ритмын боҙа. Ситкә оҙайлы ваҡытҡа китеүселәр ҙә бындай проблеманан азат түгел, уларға яңы урында ярайһы уҡ ваҡыт яраҡлашырға тура киләсәк. Был элекке ғаилә пландарының ҡырҡа үҙгәреүенә лә килтерә.

Ҡайһы бер күҙәтеүҙәргә ҡарағанда, һуңғы 10 йыл эсендә вахта методы менән эшкә йөрөүсе ҡатын-ҡыҙҙар арта барҙы, быны 2020 йылда үтәсәк халыҡ иҫәбен алыу материалдары аныҡ күрһәтәсәк. Ҡатын-ҡыҙҙарҙа ниндәй ҙә булһа һөнәр буйынса белем алыу теләге көслөрәк, һәм 16-17 йәштәге ҡыҙҙар ауылдан ситкә күпләп китә, ә йәш егеттәр, башлыса, ауылда тороп ҡала. Профессиональ белем алғас, ул ҡыҙҙар ҡала мөхитендә эш таба, артабан сит тарафтарға китеү яғын ҡарай. Шулай килеп сыға хәҙер: ҡыҙҙарыбыҙ, егеттәргә ҡарағанда белемлерәк тә, мобилерәк тә. Был хәл никахҡа инеү шарттарына ла тәьҫир итә: элегерәк бер-береһенә ғаилә партнеры була алырлыҡ кешеләр төрлө урында һәм төрлө социаль ҡатламдарҙа булып сыға. Ә башҡа төбәккә күсеп китеүсе ҡатын-ҡыҙҙарҙың кейәүгә сығыу, бала табыу теләге лә кисектерелеп ҡала. Беренсе, йәйһә сираттағы бала табыу пландарына ла шул уҡ вахта миграцияһының йоғонтоһо көслө, тип әйтергә булалыр.

**Власть даирәләре миграция проблемаларын нисек хәл итә ала? Ғөмүмән, миграция процестары менән идара итеп буламы?**

**И. Үтәшева:** Миграция закон йәйһә власть органдары тарафынан ғына көйләнә ала торған күренеш түгел. Әлбиттә, уны тыйып, йә сикләп булыр ине, әммә был дөрөҫ юл булмаҫ. Әммә миграция менән идара итеүҙең башҡа ысулдары бар. Иң отошлоһо - төбәктә иҡтисадты үҫтереү, яңы эш урындары булдырыу, социаль инфраструктураны камиллаштырыу. Шулай уҡ психологик факторҙарҙан йәштәрҙә тыуған яҡ, тыуған төбәккә позитив мөнәсәбәт тәрбиәләй алыу бик мөһим.

**Бында ватансыллыҡ, ерле патриотизм тойғоһо хаҡында ла оноторға ярамайҙыр.**

**Г. Баймырҙина:** Мин Мәскәү, Санкт-Петербург ҡалаларында Башҡортостандан барып белем алыусы студенттар ассоциацияһының ыңғай эшмәкәрлеген миҫал итеп алыр инем. Унда йәштәребеҙ араһында һеҙ телгә алған рухи сифаттар бик юғары баһалана. Уларҙың күңелдәрендә Башҡортостан рухы йәшәй, республикабыҙға файҙалы шәхес булып алыу теләге көслө. Уларҙың күбеһе тыуған яғыбыҙға ҡайтыр, дәртләнеп эшкә тотонор, тигән ышаныс бар.

**И. Үтәшева:** Ошондай патриотик пропаганда һәм һөҙөмтәле ғәмәли саралар республика эсендә лә башҡарылһа, районынан, ауылынан ситкә киткән кешеләр үҙҙәре тыуып үҫкән төбәккә файҙалы эштәр башҡарһа, республикабыҙҙың ыңғай имиджы нығый бирер ине. Ә ундай шәхестәр етерлек беҙҙә. Хатта тыуған ауылдарында йәйге дачалар һалып, шунда ҡайтып йөрөүселәр ҙә бер ни тиклем кимәлдә ошо торлаҡ пункттарының бөтөнләйгә һүнмәүенә булышлыҡ итә.

**М. Тураҡаев:** Беҙҙең республика менән сағыштырғанда, бөтөнләйгә бөлә барған Рәсәй төбәктәре бар. Унда байтаҡ ауылдар юҡҡа сыҡҡан, икенселәрендә ситтән килгән мигранттар йәшәй, конфликт-низағтар ҙа булып тора. Ҡайһы бер төбәктәрҙә ошондай ерҙәрҙе баҡсасыдачниктарға бирәләр, улар юлдарҙы төҙәтеү, инфраструктура элементтарын ҡайтанан булдырыуға үҙ өлөшөн индерә. Беҙҙә лә оптималләштереү менән бергә ауылдарыбыҙҙа йәшәүселәр аҙая бара, кеше булмаған, инфраструктура ла юҡҡа сыға. Ошо боҙоҡ әйләнештән сығыу фарыз. Баҡсасылыҡ, ваҡиғалы һәм этник туризм программалары менән дә тыуған төйәктәребеҙҙе һаҡлап ҡалыу мөмкинлеген булдыра алабыҙ. Был байтаҡ ҡына урындарҙа ауыл кешеләре йәшәйеше өсөн үтә мөһим булған инфраструктура объекттарын тергеҙергә булышлыҡ итер ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Фекер алышыу үҙгәндә бер ыңғай фекер ҡаттан-ҡат ҡабатлана килде, ул бына нимәнән ғибәрәт. Миграция - ҡурҡыныс күренеш түгел, ул халыҡ мохтажлығына бәйле һәм уның мәнфәғәттәре хаҡына бар була. Республикабыҙҙа барған яңырыу процестары һөҙөмтәле була икән, миграция тыуған төбәгебеҙ мәртәбәһен күтәреү механизмына әйләнәсәк. Уҡырға, һөнәр алырға, тәжрибә тупларға китеүселәр ҙә ҡайта торор, ә Башҡортостанға ылығып килеүселәр китеүселәрҙән һис кәм булмаҫына ышаныс бар.**

**Вәли ИҘРИСОВ**
әңгәмә ҡорҙо.

✓ *Ағай мине сәй эсергә саҡырҙы. Сәй артында яңы китабын бүләк итте һәм ҡаршыма ултырып, шиғырҙар уҡыны. Әйтерһең, мин тәүге күрешкәндәге ун ете йәшлек ҡыҙыҡай ҙа, шул халәттә һаман шиғыр тыңлайым.*



ҺӨЙӨҮ ҺҮҘЕ

# СИРЕНЬ СӘСКӘЛӘРЕ



**Сит ҡалала уҡығанда, туған телеңде, тыуған моңдарҙы һағынып йонсоғанда: "Иртәгә байрам, яҡташтар йыйыла, шағирҙар килгән", - тигән хәбәрҙе ишетеп, икенсе көн ашҡынып барып етеп, иң алғы рәткә ултырҙым. Шиғыр яратам. Тере шағирҙың ауыҙынан тәүге тапҡыр шиғыр ишетеүем.**

Алдымда торған Шағир ағай шиғырын уҡый-уҡый ҙа, туҡтап, миңә ҡарай. Онотолоп китеп, алға ынтыла биреп, хайран ҡалып ултырам икән. Оялып, башымды эйәм. Шағир ағай тағы уҡый бирә лә, миңә ҡарай. Ә мин сикһеҙ һоҡланыуымды йәшерә алмайым. Был шағирҙар шиғырҙарын нисек яҙа икән? Кем улар йөрәгенә һинең күңелдә булғанды һөйләп тора ла, ҡулдарынан тотоп яҙҙыра икән? Яҙышҡанда улар бик юғарыға күтәреләме, әллә, киреһенсә, юғарынан беҙҙең янға төшәме? Эй, шиғырҙарға ғашиҡмын бит мин!

Кисә тамамланғас, Шағир ағай яныма килеп, исемемде, ҡайҙа уҡыуымды һорашты. Унан: "Әйҙә, һеңлем, матур тауҙарҙы күрһәтәм", - тип эргәләге Ленин тауҙарында йөрөп килергә саҡырҙы. Тик иптәш ҡыҙҙарым "ҡайтайыҡ та ҡайтайыҡ" тип алып китте лә, мин яңғыҙым ҡалырға курҡып, ағай менән һаубуллашып китеп барҙым. Шул мәлдән алып бер ҡиммәтле нәмәмде юғалтҡан кеүек булып ҡалдым, төн йоҡоларым осто. "Шағир ағай мине эҙләп тапһасы", тигән хыял тоҡанды күңелдә. Исемемде, ҡайҙалығымды белә бит, моғайын, табыр, тип өмөтләндем...

Бик күп йылдар үтте. Уҡыуымды тамамлап, бер йыл эшләп алып, Мәскәүгә аспирантураға килдем. Тағы ла яҡташтар йыйылды. Шағир ағай ҙа аспирантураға килгән булып сыҡты. Хәҙер ул ғаиләле икән. Шулай булыуы билдәле инде, матур ир кеше, һоҡланғыс шәхес. Ҡайтыр саҡта бөтөн батырлығымды йыйып, уға шылтыраттым һәм: "Шағир ағай, мин ҡайтырға сығам, шунан алда һеҙгә бүләк тапшырғым килә", - тинем. Бүләкте ҡатынына, ҡыҙына ла тип алғайным, ҡымыҙ эсә торған фарфор кәсәләр ине. Үҙем фаянс, фарфор рәссамы инем.

Ағай мине сәй эсергә саҡырҙы. Сәй артында яңы китабын бүләк итте һәм ҡаршыма ултырып, шиғырҙар уҡыны. "Ошо гүзәл мәл бер ҡасан да үтмәһә ине", тип хыялландым. Әйтерһең, мин тәүге күрешкәндәге ун ете йәшлек ҡыҙыҡай ҙа, шул халәттә һаман шиғыр тыңлайым. Кисерештәремде әйтеп биргем килә лә, улай ярамағанлығын, хәҙер инде барыһы ла һуң булыуын аңлап, өндәшмәйем. Шул саҡ Шағир ағай: "Минең уҡыусыма нимә әйтергә теләгәнемде аңлайһыңмы?" - тип һораны. Ҡаушап киттем. "Беҙҙең ун йыл элек яҡташтар осрашыуында танышҡанды иҫләйһеңме?" - тип, минең бер минутҡа ла онотмаған кисерештәремде яңыртып ебәрҙе. Унан һағышлана биреп: "Һине күҙ ҡарашыңдан, бер генә һүҙеңдән аңлай белгән кеше һәр ваҡыт яныңда булһа икән ул..." - тип көрһөндө. Бер аҙ ваҡыт тын ғына ҡалып ултырҙыҡ. Һуҙһеҙ генә аңлаштыҡ. Ағай мине оҙата сыҡты. Аллея буйлап барабыҙ. Ике яҡтан да гөрләп сәскә атып ултырған сирендәр теҙелгән. Оҙон буйлы, ғорур һынлы ағай эргәһендә алһыу ебәк ҡулдәктә йәлпелдәп кенә киләм. Ошо мәлдә шул хәтлем баш әйләнде, күңел нурға сорналды. Һәм Шағир ағай көтмәгәндә мине күтәреп алды ла, күкрәгенә ҡыҫып күтәреп, алға атланы. Ул мине шулай метроғаса күтәреп алып барҙы. Ашыҡмай ғына, һөйләшмәйенсә, атланы ла атланы. Электричкаға инеп ултырғас, маңлайымды һалҡын тәҙрәгә терәп, түгелеп-түгелеп иланым. Шағир ағайҙың күҙҙәрендәге һағышты, бәхетһеҙлекте тойоуҙан, үҙемдең сараһыҙ булыуымдан иланым. Эх, теге ваҡыт ҡыйыулыҡ табып: "Мин Шағир менән тауҙарҙа йөрөргә теләйем!" - тип ҡыҫҡыра, әхирәттәремдән айырылып китә алған булһам икән...

Артабанғы тормошомда Шағир ағайҙың шиғырҙарын матбуғатта күҙәтеп йәшәнем. Уның һәр яңы шиғырын, йырын үҙемә сәләм итеп ҡабул иттем. Ғаилә ҡорҙом. Айырылыштым. Бер үҙем балалар үҫтерҙем... Тормошомдағы иң ауыр ваҡыттарҙа, инде көрәшер хәлем юҡ, инде ҡолайым, тигәндә генә, әйтерһең дә, Шағир ағайҙың йылы ҡулдары мине күтәрә лә ала һәм ике яғы ла шау сиренле аллея буйлап алып китә һымаҡ ине. Мин уның ҡосағында ял итәм, көс йыям. Һәм мин тағы ла илһамланып алға атлайым...

Бына шулай үтте ғүмер. Был минең һөйөү тарихы. Ғазабы ла, һағышы ла, бәхете лә, сирендәре һәм шиғырҙары ла бергә ҡушылған йәшлегем хәтирәһе...

**Айгөл АХУНОВА.**

**РЕДАКЦИЯНАН: Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ, ошондай матур һөйөү тарихы һеҙҙә лә теге замандарҙың матур хәтирәләре йә әле күптән түгел кисерелгән тойғолар тураһында һөйләү теләге уятмаймы? Һөйләйек әле шулар тураһында гәзит биттәрендә. Ысын мөхәббәт юҡ ул, тип, йәшлегеп ваҡытлы мауығыуҙар менән, енси теләктәрен генә ҡәнәғәтләндереп үткәргәндәргә, бәлки, һабаҡ булыр...**

ШАҢДАУ

# ТЕ ЯҠҠАМЫ, БЫ ЯҠҠАМЫ?"

**""Киске Өфө" гәзитенең 42-се һанында Сәрүәр Суринаның Мостай Кәримдең 100 йыллығы уңайынан яҙылған мәҡәләһен уҡығас, күңелдә матур иҫтәлектәр уянды.**

Башҡорт теле уҡытыусыбыҙ Ғәрифә Ғиззәтуллина ифрат телһөйәр-илһөйәр зат ине. Ул беҙҙе гел: "Һеҙ тел һаҡсылары булырға тейешһегеҙ!" - тип иҫкәртер ине. Артабан дауам итеп: "Заманында башҡорт мәктәптәрен ябырға килгән Мәскәү кешеһен кире бороп ҡайтарып ебәреүгә Мостай Кәрим ҙур өлөш индерҙе. Был хаҡта әлеге мәҡәләлә лә яҙылған. Сәсән дауҙа беленә шул. Ошондай шағирҙар кеүек, туған тел уҡытыусылары ла сая фекерле булырға, халыҡ өсөн тәүәккәл эшләргә тейеш", - тиер ине.

Мостай ағайҙың башҡорт теле уҡытыусылары менән осрашыуҙарында мин үҙем дә бер нисә мәртәбә ҡатнаштым, ул районда ла, баш ҡалалағы йыйындарға ла йыш йөрөнө, Башҡортостан Республикаһы Уҡытыусылар белемен камиллаштырыу институтында ла беҙ уның менән әйләнгән һайын күрештек. Ул халыҡсан лаҡаптарына ҡушып, үҙенең әсәһенең русса белмәйенсә, баҙарҙа һәм тимер юл станцияһында ниндәй мажараларға тап булғанын да ҡыҙыҡ итеп һөйләй торғайны. Тап үрҙәге мәҡәләлә яҙылғанса, Мостай Кәрим үҙенең бер саҡ бик ярһығанын һәм: "Мин башҡорт яҙыусыһы, мин башҡортса яҙам. Башҡорт мәктәбен япһағыҙ, минең яҙғандарымды кем уҡый?" - тип, Үҙәктән килгән чиновникты баҫтырып йөрөгәнен телгә алып үтте. Был ваҡиға тураһында һөйләгәне ҡолағымда асыҡ сағылып ҡалды: "Тел өсөн көрәшеү - һәр кемдең бурысы, был көрәш - алғы фронт", - тигәйне ул.

**Рәйсә ИСӘНБАЕВА,**
**уҡытыусы-ветеран.**
**Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылы.**

УЙЛЫҒА - УЙ

# ЭСКЕЛЕК

Ҡәһәр генә һуҡһын эскелекте,
Ләғнәт кенә төшһөн үҙенә!
Ул бит бөгөн, ҡара әжәл булып,
Ҡарап тора халҡым күҙенә.
Емтек көҫәп, осҡан ҡоҙғон кеүек,
Берәм-һәрәм сүпләй башҡортто.
Милләт өсөн килгән был афәттең
Сәбәптәрен эҙләп баш ҡатты.
Кескәй инем әле, ҡунаҡтабыҙ -
Бөгөнгөләй минең хәтерҙә.
Өлкәндәрҙең көсләп эсереүе
Күҙ алдында тора хәҙер ҙә.
"Йә, хужаның һаулығына бер тот!"-
Ҡатын-ҡыҙҙы ҡыҫтай ир-аттар.
Буҙа, ҡымыҙ түгел, араҡылар,
Йылға булып аға шараптар.
Һәр йомала тағы бер машина
Килеп туҡтай кибет янына.
Буш шешәләр тулған йәшниктәрҙе
Ауылдаштар тейәй яңынан.
Һалдат оҙатыуҙар, тыуған көндәр,
Һуғым ашы, бәпәй туйҙары.
Сәсеү батырҙарын данларға тип,
Уҙғарылған һабантуйҙары.
Бөтә ерҙә, табындарҙы йәмләп,
Ялтырашып тора "аҡбаштар".
Эстек ауыл менән, бар ил менән,
Булмаһа ла әле "алкаштар".
Яңы быуын сабыйҙары тыуҙы,
Араҡыны татып ҡарында.
Сәңгелдәктә ята бәпәйҙәре,
Ата- әсә уның янында,
Ә көмөшкә инде табында...
Әле килеп иҫ-аҡылдар етмәй -
Шул ағыуҙан халҡым ҡырыла.
Нимә сәсһәң, шуны ураһың шул,
Яман шеш тә бер көн ярыла.
- Нисегерәк үлгән?
- Аҫылынған...
- Белмәйһеңме ниңә?
- Эскән булған...
- Бигерәк тә йәш ине бит үҙе...
- Күрәһеңдер, ул йәшәүҙән туйған...
Эй, Хоҙайым, ошо һөйләшеүҙе
Ишетмәһә ине ҡолағым.
Башҡорттарҙың кәмегәнен күреп,
Ғәрлегемдән килә илағым!..
Матбуғатта шундай һандар булды:
Алты егет тик бер Сәксәйҙә
Аҫылынған. Былдай вәхшилектәр
Юҡтыр хатта бөтә Рәсәйҙә.
Эскән килеш машинала осҡан,
Һыуға батҡан - айыҡ булмаған.
Спирт менән, бахыр, ағыуланған,
Утыҙы ла әле тулмаған...
Һиҙелмәй ҙә китә йәштәребеҙ,
Әсәләрҙең сәсен ағартып.
Алһыу йөҙөн мәңге ҡарайтып,
Тик бер көндә уны ҡартайтып.
Ҡоростандыр әсә йөрәге лә,
Шул ҡайғынан нисек ярылмай!
Ҡороп ҡына китһен был эскелек!
Әжәлдәрҙән дарыу табылмай.
Эй башҡортом, минең милләттәшем!
Онотмайыҡ ғүмер уҙғанын.
Араҡы һәм көмөшкәне түгел,
Беҙ тотайыҡ ҡымыҙ, буҙаны.
Онотмайыҡ шуны: йәшәр өсөн
Килгәнбеҙ бит бары ҡунаҡҡа.
Ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул, ти мәҡәл,
Аңлатайыҡ шуны халыҡҡа.
Көмөшкәсе ҡулы тартышһасы,
Һатҡан саҡта ошо хәмерҙе.
Тағы ла бер ауылдашына ул,
Үҙе теләп, ҡаҙа ҡәберҙе...
Айыҡ ауыл булып йәшәйексе,
Башҡорттарым минең, яҡташтар!
Бары ирек һөйгән милләтемде
Ҡырмаһындар ине "аҡбаштар"!
Ҡәһәр генә һуҡһын эскелекте,
Ләғнәт кенә төшһөн үҙенә!
Ул бит бөгөн, ҡара әжәл булып,
Ҡарап тора халҡым күҙенә...

**Зилә ҒӘЙЕТҠОЛОВА.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ТӨРЛӨСӘ КИСЕРЕЛӘ

■ Ғаиләлә килеп тыуған проблемаларҙы ирҙәр һәм ҡатындар төрлөсә кисерә. Ратгер университеты ғалимдары билдәләүенсә, бындай саҡта ҡатын-ҡыҙҙар борсола башлай һәм тормош иптәшенә ҡарата ышанысы һүрелә. Ир-егеттәр иһә быны тағы бер уңышһыҙлыҡ итеп кенә ҡабул итә. Күпселек ғаиләләрҙә йыш осраған проблемалар һәм кисерелгән тойғолар булып һағыш, хәүеф, өмөтһеҙлек тора. Ауырлыҡтарға ҡараштар ҙа айырыла. Мәҫәлән, ҡатын-ҡыҙ проблеманы һөйләгәндән үҙен енелерәк тоя. Ир-егетте был, киреһенсә, асыуландыра ғына.

■ Бала тәрбиәләгәндә махсус журналдарҙы һатып алмау күпкә хәйерлерәк. Американың педиатрия академияһы ғалимдары асыҡлауынса, бындай йүнәлештә эшләгән журналдарҙа файҙалы мәҡәләләр менән реклама иғландары ла бар. Уларҙың һәр алтынсыһы баланың ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуя, тип иҫәпләй ғалимдар. Мәҫәлән, күп кенә рекламалағы фотоларҙа балалар эстәрендә йоҡлай, әммә педиатрҙар бәләкәй балалар арҡаһында йоҡларға тейеш, ти. Был көтөлмәгән үлем синдромын түбәнәйтә. Ғалимдарҙы рекламаларҙың педиатрҙарҙың кәңәштәренә ҡаршы килеүе борсой.

■ Ғаиләләге мөнәсәбәттәрҙе һаҡлау һәм нығытыу өсөн ирендә йә ҡатыныңды социаль селтәрҙәрҙә дуҫтар исемлегенән алып ташларға кәрәк, ти ғалимдар. Килеп тыуған мәсьәләләрҙе лә күҙгә-күҙ ҡарап һөйләшеп хәл итеү күпкә уңышлыраҡ. Тикшеренеүҙәрҙең авторы Йен Кернер, ҡатыны менән социаль селтәрҙәрҙә аралашмай башлағас, бер-береһен яҡшыраҡ аңлай башлауҙарын белдерә. Тағы бер тикшеренеү күрһәтеүенсә, ғаиләлә ир менән ҡатын персональ интернет-мәғлүмәттәрен йәшерергә тейеш түгел. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусыларҙың 56 проценты өсөн телефондың - пинкодын, социаль селтәрҙәрҙең һәм почтаның паролен белеү тоғролоҡ билдәһе булып тора икән.

■ Мичиган университеты тикшеренеүселәре билдәләүенсә, балалар бәләкәй саҡта хис-тойғоларҙы айырырға өйрәнһә, өлкәнәйгәс башҡаларҙы аңлауы енелерәк була. Һынауҙарҙа аҙ тәьмин ителгән ике йәшкә тиклемге 89 бала ҡатнашҡан. Улар әсәләре менән бергә һүрәтле китаптар ҡараған. Китаптың сюжеты ябай һәм хистәргә бай: төп герой үҙенең көсөгөн юғалтҡан һәм аҙаҡтан уны тапҡан. Әсә ошо хистәрҙе бала үҙе кисергән ниндәйҙер ваҡиғаларға бәйләп аңлатырға тейеш булған. Йәғни, бала теге йәки был ситуацияны таный белһә, үҙен нисек торға кәрәклеген дә беләсәк.

■ Британия ғалимдары мәғлүмәттәренә ярашлы, иртәнге зарядка ябығыуҙың эффектын 20 процентҡа күтәрә. Тик күнегеүҙәр ас ҡарынға башҡарылырға тейеш. Тикшеренеүҙәрҙә 12 ир-егет ҡатнашҡан, уларҙың бер өлөшө спорт менән ас көйөнә, бер өлөшө иртәнге аштан һуң шөғөлләнгән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, иртән спорт менән шөғөлләнеүселәрҙең көн дауамында калориялы ризыҡ ашарға теләге булмай, улар асыҡып та бармай. Ә бына ас көйөнсә спортзалға йүнәлеүселәр уларға ҡарағанда 20 процентҡа калорияларҙы күберәк яндыра.

ЙӘНӘШ ДОНЪЯ



# ТАЙЫШТАБАН ТУРАҺЫНДА...

## ысынбарлыҡ

### Айыу аңра түгел!

Айыу менән кеше араһындағы конфликт ҡайҙан килә? Был тәңгәлдә ҡурсаулыҡ белгестәре Бөрйән районы буйынса ғына түгел, ә дөйөм Башҡортостан буйынса ла аңлатма бирә. Октябрь айында айыу ныҡлап һимереп алыуға, май йыйыуға тотона. Быйыл ул ашай торған еләктәр, көпшәле үләндәр, сәтләүек уңған. Ҡырағай балды ла оҫта таба ул, бик булмаһа, ҡырҙа ултырған умарталарҙы ла урлап ашай. Әммә эре йәнлек өсөн былар ғына аҙ. Уға аҡһым кәрәк. Быларын айыу ҡырмыҫҡа иләүҙәренән, серек ағас ҡорттарынан, ерҙәге ояларҙан, кимереүселәр өңөнән, илек-боландарҙан, ҡарт һәм ауырыу кейектәрҙән, үләкһәемтектәрҙән һәм хатта бәләкәйерәк айыуҙарҙан да ала. Эйе, айыу бик кәрәктә икенсе айыуҙы ла ашап ҡуя икән. Тайыштабан совет мультфильмдарында ғына ул шәфҡәтле, бүре менән төлкөнө ҡыуып, ҡуян менән терпене яҡлап йөрөй. Ә асылда, унайы килгәндә, бүрене лә, төлкөнө лә, ҡуян менән терпене лә ялмап йота. Бына ошондай мәскәйлеге арҡаһында был эре януар Көньяҡ Уралдың ҡаты тәбиғәт шарттарында тереклек итә ала ла инде. Шулай ҙа болан, мышы кеүек эре табышты тотоу бик һирәк эләгә. Был осраҡта иң енел ҡорбан - ауыл малы. Малға ла һәр айыу теймәй. Айыуҙарҙың да малға тейә торғандары була. Ғәҙәттә, былар ҡарт айыуҙар йәки һунарсы тарафынан йәрәхәтләнеп, башҡа төрлө һунар итә алмағандар. Йәш йәки балалы инә айыу малға тейә һалып бармай, ти белгестәр. Был насар ғәҙәткә оло ата айыуҙар ғына мәшһүрләнә. Унан һуң, йылына ла ҡарай икән айыуҙың мал һуғыуы. Ҡайһы йыл айыуҙар ныҡ әүҙемләнә, ҡайһы йыл һирәк-һаяҡ ҡына ишетелеп ҡуя. Мышар (миләш) уңған йылда уларға күп ит кәрәк була. Сөнки был емеште күпләп ашап, ашҡаҙандарындағы әселекте ит тәме менән генә баҫалар. Бына бер ҡыҙыҡ мәғлүмәт, шулай бит.

Айыуҙарҙың малға тейеүенә күп осраҡта халыҡ үҙе ғәйепле. Малды көтмәү, кистәрен ҡарап алмау айыуҙарға ҡулай ғына. Мәҫәлән, бер видеола айыу малдарҙы ҡараңғыла ҡыуып йөрөтә, ут яҡтыһында был асыҡ күренеп ҡала. Көҙ көнө малдың ҡараңғыға ҡалыуы өсөн айыу яуап бирмәй, әлбиттә. Тайыштабан барлығын, уның тап ошо мәлдә һунар итерен белгәс, нинә улай үҙ мөлкәтеңә яуапһыҙ ҡарарға?

Ауыл ситенә ҡый сығарып түгеү бигерәк тә йәш айыуҙарҙы йәлеп итә. Хәҙер бит аҙыҡ-түлекте лә сүп-сар менән ҡуша ташлай ҙа ҡуялар. Инәһенән айырылған үҫмер айыуҙар, бәләкәйҙән инәһенә эйәреп туристарҙың ҡалған аҙығын тәмләп өйрәнгән булһа, яңғыҙ ҡалғас, һис шикһеҙ, аҙыҡты кешеле урындарҙан эҙләйәсәк. Ул инде тауышҡа ла, шаушыуға ла, кеше еҫенә лә һәм хатта уны күреүгә лә күнеккән. Мылтыҡтың ни икәнен дә, әҙәмдәрҙән үҙенә зыян килергә мөмкин икәнен дә белмәй. Бая үрҙә әйткәнсә, кешене тәмле ризыҡ биреүсе итеп кенә ҡабул итә. Әммә был да айыуҙың һәр ваҡыт шулай ғына буласаҡ икәнен дәлилләмәй. Аҙыҡ тапмағанда йәки кеше ҡылығында, хәрәкәтендә нимәлер оҡшамаған осраҡта ҡапыл ғына үсегеп, ҡыҙып китә ала. Айыу тиҙ ҡыҙыусан, йәғни бик ҡыҙыу ҡанлы януар икән. Ул арыҫланға, филгә йәки айғырға ҡарағанда ла үсексәнерәк. Әммә һәр ваҡыт һөжүмдә һайламай. Күп осраҡта айыу кеше менән осрашмаҫҡа, осрашҡан хәлдә лә боролоп китергә тырыша. Уның үкереп ебәреүе, урынында һикереп-һикереп алыуы ла, аяғүрә баҫыуы ла ҡурҡытыу алымы ғына. Былар әле уның ташланырын аңлатмай. Һәм айыуға һунар итеүҙә махсус сценарий булмаған кеүек, айыу тәртибенең дә билдәле генә һыҙаттары юҡ. Уның кәйефен һәм ниндәй осраҡта нисек ҡыланырын берәү ҙә әйтә алмай.

Айыу бик аҡыллы, хәйләкәр һәм уйлап эш итә белгән заттан. Ул, бүре һымаҡ, асыҡҡан да, күҙ йомоп ташланған түгел. Был януар кешенең үҙенән көсһеҙлөгөн яҡшы белә, ололары уның ҡораллымы-ҡоралһыҙмы икәнен дә аңлай ала.

Ошо урында тағы бер уҡыусыбыҙҙан килгән тарихты миҫалға килтерәм, моғайын, ҡыҙыҡлы булыр. "Һунарсы атаййбыҙ яҙ башында ике айыу балаһын алып ҡайтты. Моғайын, әсәһен өңөнән сығарып атҡандарҙыр инде. Был етемдәрҙең берене һыйыр һөтөнә яраҡлаша алмай үлде, икенсе ҙурырағы күтәрелеп китте. Беҙ, балалар, уны сөскө менән имеҙҙек. Көҙгә айыу балаһы 5-6 йәшлек балалай булып ҙурайҙы һәм арыуыҡ көслө булды. Сүскигә талашып, 10-12 йәшлек малайҙарҙы тәгәрәтеп һалып дөмбәҫләй башланы. Майға бешерелгән икмәк яратты. Бер саҡ әсәйебеҙ икмәк бешерә башлағас, ул да килеп урындыҡҡа менде. Мин өҫтәл артында икмәк ашап ултырам. Айыу балаһы өҫтәлдәге икмәккә ынтыла. Бер алып бирҙем, ике бирҙем, был һаман һорай. Табаҡты төпкәрәк шылдырып ҡуйғайным, айыу үсегеп китеп, арттан килеп минең елкәгә ҡундырҙы ла ҡуйҙы. Иҫемдә юйып, өҫтәл аҫтына тәгәрәгәнмен. Айыу табаҡты алып сығып ҡасҡан. Бына ул нисек итеп проблеманы хәл итеү юлын тапҡан.

Аҙаҡ шул айыу һөттө күберәк эсеү өсөн һыйыр һауып килгән апайыбыҙға һөжүм итә башланы. Бер тапҡыр туранан-тура килеп йәбешеп, биҙрәһен талап эскән, икенсе тапҡыр йәшенеп ятҡан да, ҡапыл килеп сығып апайҙың аяҡтарын ҡосаҡлап, уны ергә йығып һалған һәм тағы ла һөткә туйынған. Өсөнсөһендә кәртәнең ҡапҡаһы төбөнә килеп көтөп торған һәм ике биҙрә менән сығып килгән кешене ишеккә ҡыҫҡан. Тегә сараһыҙҙан биҙрәһен ултыртырға мәжбүр булған.

Өйҙә үҫһә лә, ҙурая бара айыу балаһы ҡош-ҡортҡа тейә башланы һәм уны инде ҙурайып барғанында ауылдан ҡыуырға тура килде. Унда ла ҡат-ҡат килеп, аласыҡ ишеген ҡутарып асып, эстәге аҙыҡ-түлекте туҙҙырып, ҡураларҙың тәҙрәһен емереп инеп аптыратты. Эткә иҫе лә китмәй ине. Йәнен көйҙәрһәләр, тәгәрәтеп йөрөтөп туҡмай ине эттәрҙе лә. Әрләһәң йәки таяҡ менән ҡурҡытһаң, кешегә лә сәпәп ебәрергә аптырамай. Ғаиләбеҙҙе һәм күрше-тирәне ҡурҡытып алғайны инде. Мылтыҡтан атып, саҡ ҡыуып ебәрҙек. Бына шундай айыу балаһы булды беҙҙең..."

"Элек-элек" тигәнгә йәбешәбеҙ" тиһәк тә, элек халыҡ тәбиғәткә яҡыныраҡ булған, уны яҡшыраҡ аңлаған шул. Бөгөн улай түгел. Мәҫәлән, айыуҙың энерҙән йөрөй торған януар һәм иртәгәнән төшкәсә йоҡлай икәнен бик һирәктәр генә беләләр. Иртәләп урманда йөрөгәндәр, тауышланған осраҡта, айыуҙы уята ла инде. Йоҡоһонан өркөтөп уятылған айыуҙың асыулы булыуы ла бар. Быны белеү ҙә бер һабаҡ, шулай бит?

"Айыуҙан ауыл халҡына ғына түгел, ниндәй һаҡ аҫтында булған ҡурсаулыҡ та зыян күрә, - тип һөйләй "Шүлгәнташ" ҡурсаулығы директоры Михаил Косарев. - Үткән аҙнала ғына бер йәш айыу солоҡтарға көпә-көндөҙ өс тапҡыр һөжүм итте. Уны көн яҡтыһы ла, радио тауышы ла, усаҡ та, 20 метр алыҫлыҡта йөрөгән кешеләр ҙә өркөтмәне. Саҡ ҡурҡытып ҡыуып ебәрҙек, әммә бының менән генә өмөт өҙмәҫен беләбеҙ. Бөтөн умарталыҡтарҙа ла электрлаштырылған ҡоймалар, солоҡтарға сигнализациялы датчиктар ҡуйылған. Әммә айыуҙар был ҡарауылдарҙы ла урап үтә. Бына шундай януар ул тайыш табан..."

Солоҡ һәм умарталарға һунар итеүсе айыуҙар ҙа, бурҙарҙың төрлөһө булған кеүек, "умартасы" һәм "солоҡсо" бурҙары булып махсуслаша икән. "Умартасы"лар умартаны күтәреп алып китеп, хәүефһеҙ урында ашай. "Солоҡсо"ларға ағасҡа менеп китеү генә бурыс. Икеһе лә үҙ эштәренең бөтөн нескәлектәрен һәм хәйләһен белә. Мәҫәлән, "умартасы"ның тапҡырлығын Илдар Абдуллин һөйләне. Уларҙың умарталығынан айыу умартаны күтәреп кенә алып китә лә, йылғаға тиклем ипле генә итеп алып барып, һыуға тығып тора икән. Бал ҡорттары күшегеп, тонсоғоп хәлһеҙләнгәс, асып тороп, рәхәтләнеп ҡорто-кәрәҙе менән ҡуша ялап ала. "Ярай, бер-ике умарта айыуҙыҡы инде ул, хәл юҡ", - тип ихлас ҡына килешә лә әле был хәл менән урман кешеһе.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

**(Дауамы. Башы 43-сө һанда).**

ЙОЛА СЦЕНАРИЙЫ

# ТӘМЛЕ БУЛҺЫН БУҘАҒЫҘ!

*Буҙа яһау оҫтаһы - буҙасы инәйҙең өйө. Балаҫтар, сиккән таҫтамалдар, "Бөгөн - буҙа байрамы", "Тәмле булһын буҙағыҙ!" тигән яҙыуҙар эленгән. Бер нисә ҡатын буҙа яһау менән мәшғүл.*

*Балалар инә.*

**1-се ҡыҙ:** Һаумыһығыҙ, инәйҙәр! Беҙ ҙә буҙа яһарға өйрәнәйек, тип килгәйнек. Өйрәтә алаһығыҙмы?

**Рәйсә:** Ярай, өйрәтергә булыр, ҡыҙҙар! Изге ниәт менән килгәнһегеҙ икән, уҙып ултырығыҙ.

**2-се ҡыҙ:** Рәхмәт, инәйҙәр! Ултырмаға килмәнек, өйрәтмәгә килдек.

**3-сө ҡыҙ:** Буҙаны нисек яһайҙар ул, бик белгебеҙ килә шуны, инәйҙәр?

**Заһиҙә инәй:** Әйҙәгеҙ, улайһа, өйрәнәйек. 5-6 литр һыуыҡ һыу алдыҡ. Шуға 0,7 литрлыҡ банка менән ике банка һоло ярмаһы һалырға һәм 10 минутҡа ултыртып ҡуйырға. Шунан бер ҡашыҡ аҡ май, бер стакан шәкәр ҡомо, ике ҡалаҡ дәрсен (корица) һалып, талғын утта бер сәғәт ҡайнатырға. Туҡтауһыҙ болғатып торорға. Иҫтә ҡалһын өсөн, әйҙәгеҙ, болғатып тороуҙы үҙегеҙгә ҡушайым.

Бер сәғәт болғатҡас, кесәл кеүек кенә шыйыҡсаны иләк аша һөҙөргә лә һыуытырға ҡуйырға. Һыуынғас, ярты литр ҡымыҙ һалып, ҡалын шәлгә-юрғанға төрөп, йылы урынға ҡуйырға. Ике тәүлектән буҙа әҙер була. Ҡабатлағыҙ әле мин әйткәнде!

*(Ҡыҙҙар ҡабатлайҙар).*

**Заһиҙә инәй:** Мин һеҙгә буҙа ҡойоуҙың иң ябай, һәр кем эшләрлек рецебын өйрәттем. Был эсемлекте борон-ғоса итеп, еренә еткереп әҙерләүҙең иң шәп оҫталары Учалы, Әбйәлил, Белорет райондарында йәшәй. Ул яҡтарға юлығыҙ төшһә, өйрәнеп ҡайтығыҙ, балалар, беҙгә лә өйрәтерһегеҙ.

**3-сө ҡыҙ:** Буҙаны бик шифалы, тиҙәр, шулаймы?

**Руза инәй:** Шифаһынан үҙем белгәнде генә әйтәйем әле: ашҡаҙан, бөйөр, бауыр ауырығанда буҙа бик һәйбәт дауа була, нервылар системаһы эшмәкәрлеген яҡшырта, ҡанды, эске ағзаларҙы таҙарта, тәнде йомшарта. Организмдағы бөтә ауырыуға ҡаршы тора ала ул. Буҙаны башҡорттар бик борондан белгән, һәр заманда яһап эскән. Шуға күрә һоло, арыш, арпа сәскән. Был ашлыҡтарҙы ата-бабаларыбыҙ буҙа яһау өсөн дә ҡулланған. Халыҡ сәләмәт, сыҙам, аҡыллы булып оҙаҡ йәшәгән. Шулай булғас, ҡыҙым, буҙаның ниндәй көслө эсемлек икәнен үҙегеҙ аңлағыҙ.

**Ҡыҙҙар:** Рәхмәт, инәй!

**1-се ҡыҙ:** Инәй! Әҙер буҙаны тәмләп ҡарарға яраймы?

**Заһиҙә инәй:** Ҡыҙҙар, ике көн элек бына был һауыттағы буҙаны әсетергә ҡуйғайным, тимәк, ул бөгөн әҙер булғандыр. Беҙ йәш буҙаны һөҙгәнсе, йәгеҙ әле, ҡыҙҙарым, йырлап-бейеп, күңел асып алайыҡ!

*Йыйылыусылар күмәкләп "Башҡортостан-гөлбостан" ҡобайырын башҡара (Яҡупова Рәйсә ижады).*

**Рәйсә инәй:** Ғүмер бик тиҙ уҙа, Ҡартлыҡ ҡулын һуҙа. Сырхау баҫмай торһон, Эсәйек беҙ буҙа.

*(Эсеп ҡарай).*

Йәгеҙ әле, әхирәттәр, ҡыҙҙар! Буҙа өлгөргән. Бөтәгеҙ ҙә тәмләп ҡарағыҙ!

*(Барыһы ла буҙа тәмләйҙәр).*

**Ҡыҙҙар:** Һай, ниндәй тәмле буҙа! Шифаһы тәнгә таралды!

**Руза инәй:** Һай,буҙаһы, буҙаһы
Таҙарта бит тәндәрҙе.
Күңелдәрҙе елкендерә,
Дәртләндерә йәндәрҙе.

*"Һай, тирҙә-ритәйем" йырын башҡаралар.*

**Нурия:** Бейеүселәр бер баҫалар,
Бигерәк ҡаты баҫалар.
Һеҙҙә нисек, беҙҙә шулай -
Бейеп күңел асалар.

**Бейеүсе:** Фәнис ағайға ла буҙа килеште, ҡандай ҙа дәртләнеп китте. Әҙә баҫ, бейе лә ҡуй, ағай!

**Заһира инәй:** Һай, буҙаһы, буҙаһы,
Йәшлек сағым иҫкә төштө:
Урамдарҙан бейей-бейей,
Тыпырлатып уҙаһы!

*Йыр: Эшләйбеҙ ҙә, йырлайбыҙ ҙа ".*

**Айгөл:** Матур йырҙан ғына тормай,
Ғүмерҙәрҙең һәр көнө.
Кескәй генә шатлыҡтан да
Эшлә һин байрам көнө.
Ҡайғы-хәсрәт уҙыр-китер,
Дуҫтар булһа, ҡайғырма.
Йыр-моңдарҙан, ысын дуҫтарҙан,
Хоҙай, беҙҙе айырма.

*Йыр.*

**Миңзилә инәй:** Буҙа эсеп дәртләндем,
Дарман төштө йөрәккә.
Дөбөрләтеп берҙе баҫһам -
Ҡайтмам микән йәшлеккә!..

Әхирәттәр! Буҙа һеҙҙе лә дәртләндереп ебәргәндер! "Шәл бәйләнем"де әйттереп алабыҙмы?

**Ҡатындар:** Шулай! Әйтерең бармы! "Шәл бәйләнем " йыры яңғырай.

**Заһиҙә инәй:** Тәндәр китте еңеләйеп,
Бейеһәк,туҙан туҙа,
Туҙһа туҙһын, ҡартаймайыҡ,
Эсәйек әле буҙа.
Тыпыр-тыпыр, тыпырлатып
Бергә күңел асайыҡ.
Буҙа эсеп, йырлап-бейеп,
Ҡартаймайса йәшәйек.

Бына, балалар, әхирәттәр, ҡунаҡтар, беҙ һеҙҙең менән бик шифалы эсемлекте, буҙаны яһау серҙәренең береһен генә өйрәндек - үҙебеҙҙең ауылда билдәле булғанын. Халҡыбыҙҙың боронғо йолаларын, ғөрөф-ғәҙәттәрен шулай дауам итәйек: юғалтмайынса йәш быуынға еткерәйек. Ил-көн тыныс булһын. Яҡты ҡояш һәр саҡ нурын һибеп торһон! Ер йөҙөндә тыныслыҡ булһын. Халыҡтар бер-береһе менән дуҫ һәм татыу йәшәһен. Ә хәҙер ҡунаҡтарҙы ла шифалы эсемлек менән һыйлайыҡ.

**Заһиҙә КӘРИМОВА.**
**Бүздәк районы Ҡаңны-Төркәй ауылы.**



*Учалыла бер байрам да буҙаһыҙ үтмәй.*

СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

### "Яткан килеш ат уйнатыу"

Тәүторош: арҡала ятабыҙ, ике үксә лә түшәккә ныҡ итеп ҡыҫылған һәм күнегеүҙе башҡарған ваҡытта унан айырылмай. Тын алғанда уң аяҡты еңелсә бөгәбеҙ, тын ирекле сыға, туҡтамайынса һул аяҡты бөгәбеҙ һәм бер үк ваҡытта тын алабыҙ. Бер аяҡты бөккәндә, икенсеһе ҡапыл ғына турая. Тын - файҙаланылған һауа ирекле сыға, шуға ул турала хатта уйлап та ҡарамағыҙ. Күнекмәне эшләй башлағанда һәр 8 тын алыу-хәрәкәттән һуң 3-5 секунд ял итәбеҙ. Өйрәнеп алғас, бер эшләгәндә 16 йәки 32 тын алыу-хәрәкәт башҡарырға мөмкин.

### "Яткан килеш алға аҙым (рок-н-ролл)"

Арҡала ятабыҙ, ҡулдар тән буйлап һуҙылған. Уң аяҡты тубыҡтан бөкләп ҡорһаҡҡа тиклем күтәрәбеҙ, бер ыңғай тын алабыҙ. Артабан уң аяҡ төшә, һул аяҡты тубыҡтан бөкләп эс тәңгәленә тиклем күтәрәбеҙ. Уң тубыҡ өҫкә - тын алабыҙ, һул тубыҡ өҫкә - тын алабыҙ. Тынды ирекле сығарабыҙ. Күпме тын алыу-хәрәкәт эшләй алаһығыҙ - шунса эшләгеҙ. Йәйлап бер туҡтауһыҙ 32 тапҡыр эшләргә тырышырға кәрәк. Ауыр булһа, 8 тапҡыр ғына эшләп, 3-5 секунд ял итеп алығыҙ. Әгәр бер аяғығыҙ йәрәхәтләнгән йәки фалиждан һуң икән, сәләмәте менән генә эшләгеҙ. Йәйлап ауыртҡанын да ҡыбырлатырға тырышығыҙ һәм уны һәр саҡ уйығыҙҙа ғына, сәләмәте кеүек, ҡорһағығыҙға тартаһығыҙ икән тип күҙ алдына килтерегеҙ.

Йөрәк сирлеләргә, тындары быуылыусыларға (астма), гипертониктарға һәм ныҡ оло йәштәгеләргә тубыҡты ныҡ тартырға ярамай, уларҙы саҡ ҡына күтәрһәгеҙ ҙә етә.

### "Метроном"

Арҡала ятабыҙ, аяҡтар тубыҡтан бөгөлгән, тубыҡтар ике яҡҡа айырылған (күнегеүҙе эшләгәндә аяҡтар шул уҡ торошта ҡала, тубыҡтар тәҙәймәй). Уң тубығығыҙҙы ҡапыл ғына һул аяғығыҙ ағына һалығыҙ - тын алығыҙ. Ҡабат урынына ҡуйсерегеҙ - тын сығарығыҙ. Шул уҡ күнегеүҙе һул аяғығыҙ менән башҡарығыҙ. Хәлегеҙҙән килгән тиклем эшләгеҙ, әммә йәйлап тиҙ темпта 8 тапҡыр туҡтауһыҙ эшләргә тырышығыҙ. Норма - 12 тапҡыр 8 күнегеү (йәғни 96). Ныҡлап өйрәнгәндән һуң, бер туҡтамай 16 йәки 32 тапҡыр эшләргә мөмкин.

### "Янбашты күтәреү"

Арҡала ятабыҙ, аяҡтар тубыҡтан бөгөлгән, ҡулдар баш аҫтында. Ҡапыл янбашты күтәрәбеҙ ҙә, бер үк ваҡытта ҡыҫҡа һәм шаулы итеп тын алабыҙ. Янбашты төшөргәс, көсөргәнештән арынып, бер секунд ял итегеҙ.

Ҡабат ҡапыл ғына янбашығыҙҙы күтәрегеҙ ҙә, шунда уҡ төшөрөгөҙ. Шаулы итеп тын алғанда янбашығыҙҙы күтәреү менән бер рәттән осағыҙҙы һәм янбашығыҙҙы ҡыҫығыҙ. Янбашты төшөрҙөгөҙ - көсөргәнештән арынығыҙ.

Тәүҙә күнегеүҙе эшләй алғанса ғына башҡарығыҙ. Артабан инде туҡтамай 8 тапҡыр эшләүгә күсегеҙ. 3-10 секунд ял иткәс, тағы ла 8 тапҡыр ҡабатлағыҙ. Норма - 12 тапҡыр "һигеҙ".

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 4 НОЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Т/с "Куприн. Поединок". [16+]
8.10 Д/с Премьера. "Россия от края до края". [6+]
10.10 Х/ф "Полосатый рейс". [12+]
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 Х/ф "Королева бензоколонки". [0+]
13.40 Х/ф "Служебный роман". [0+]
16.40 Д/с Большая премьера. "Рюриковичи". [16+]
18.40 Премьера. Большое гала-представление к 100-летию Советского цирка. [12+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Отчим". [16+]
23.30 Познер. [16+]
0.30 Х/ф Премьера. "Моя кузина Рэйчел". [16+]
2.30 Про любовь. [16+]
3.25 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

05.45 Х/ф "Любовь с испытательным сроком". [12+]
10.00 Сто к одному.
10.50 "100ЯНОВ". [12+]
11.55 Х/ф "Идеальная пара". [12+]
14.00, 20.00 Вести.
14.20 Х/ф "Любовь и голуби". [12+]
16.50 "Удивительные люди-4". [12+]
20.30 Х/ф "Движение вверх". [12+]
23.10 Х/ф "Легенда №17". [12+]
02.00 Т/с "Демон революции". [12+]
04.00 Д/ф "Русская смута. История болезни". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**8.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 Это мы! [6+]**
**10.15 "Это Родина моя!" Концерт. [0+]**
**10.45 Гора новостей. [6+]**
**11.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**12.30 Спектакль "Таганок". [12+]**
**14.30 100 имен Башкортостана. [12+]**
**16.00 "Я люблю тебя, жизнь!" Концерт. [12+]**
**18.00 Историческая среда. [12+]**
**19.00, 20.00 Концерт Сибайского концертно-театрального объединения. [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00, 5.00 Теге өсәү! [12+]**
**23.30 Күстәнәс. [12+]**
**0.00 Х/ф "Подсадной". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Вознесись мой, Тулпар!" [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 5 НОЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.35 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Отчим". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/с "Подлинная история русской революции". [12+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 Минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Расплата". [12+]
23.55 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Демон революции". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Волчье солнце". [16+]**
**11.15 Республика Live. #Дома. [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Дорога к храму. [0+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Тайм-аут. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**20.45 Полезные новости. [12+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 По сути дела... [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Подсадной-2". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**1.30 Бәхетнамә. [12+]**
**2.30 Спектакль "Молодые сердца". [12+]**
**4.30 Автограф. [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 6 НОЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 1.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.35 На самом деле. [16+]
19.45 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Отчим". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/с "Подлинная история русской революции". [12+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 Минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Расплата". [12+]
23.55 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Т/с "Демон революции". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Волчье солнце". [16+]**
**11.15 По сути дела... [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Ты можешь! [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Полезные новости. [12+]**
**20.45 Честно говоря. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 Ете егет. [12+]**
**23.45 Земляки. [12+]**
**0.00 Х/ф "Осенью 41-го". Новости (на баш. яз.). [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.15 Спектакль "Тамарис". [12+]**
**5.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 7 НОЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 3.00 Новости.
9.45 "Жить здорово!" [16+]
10.45 Парад 1941 года на Красной площади. [12+]
12.00 Москва. Красная площадь. Торжественный марш, посвященный 78-й годовщине парада 7 ноября 1941 года.
12.55, 17.00, 2.10, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Отчим". [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Д/с "Подлинная история русской революции". [12+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 Минут". [12+]
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 Т/с "Расплата". [12+]
23.55 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
02.00 Д/ф "Великая Русская революция". [12+]

### БСТ

**7.00, 9.15 Сәләм. [12+]**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**10.00, 16.30 Т/с "Волчье солнце". [16+]**
**11.15 Честно говоря. [12+]**
**12.00 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Земляки. [12+]**
**14.45 Ради добра. [6+]**
**15.00, 17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 Гора новостей.**
**18.00 Учим башкирский язык. [0+]**
**18.15, 20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Криминальный спектр. [16+]**
**21.00 Уфимское "Времечко".**
**22.00 Республика Live. #Дома. [12+]**
**23.00 "Песня года". [12+]**
**23.30 Автограф. [12+]**
**0.00 Х/ф "Пусть будет Лиза". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Вой волчицы". [12+]**
**5.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 8 НОЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.35 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.45 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Голос". Новый сезон. [12+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.25 Д/ф Премьера. "История Уитни Хьюстон". [16+]
2.30 На самом деле. [16+]
3.30 Про любовь. [16+]
4.15 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45, 03.50 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.50, 18.50 "60 Минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Кто против? [12+]
17.25 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 "Юморина". [16+]
23.45 "Сто причин для смеха". Семён Альтов.
00.15 Х/ф "Разбитые сердца". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм.**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00, 5.30 Д/ф "Сотворить благо. Рукавишниковы". [12+]**
**10.30, 6.00 Великий Уфимец. [12+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00, 22.00 Точка Z. [12+]**
**12.30, 21.00, 4.15 Башҡорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән ғүмер. [12+]**
**14.00 "Весело живем. [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью.**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.15 Гора новостей.**
**16.30 Д/ф "Кубинский парень и его китайская мечта". [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45, 20.30 Интервью. [12+]**
**19.00 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 Инцидент-репортаж. [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**23.45 Земляки. [12+]**
**0.00 Х/ф "Любовь из прошлого". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.15 Спектакль "Земляки". [12+]**
**4.45 Ете егет. [12+]**

## 9 НОЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.40, 6.10 Д/с "Россия от края до края". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
6.40 Х/ф "За двумя зайцами". [0+]
8.10 Играй, гармонь любимая! [12+]
8.55 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.10 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.25 Д/с "Теория заговора". [16+]
11.10 Д/ф Премьера. "Александра Пахмутова. Без единой фальшивой ноты". [12+]
12.15, 14.15 "Горячий лед". Фигурное катание. Гран-при-2019. Чунцин. Анна Щербакова. Елизавета Туктамышева. Софья Самодурова. Прямой эфир из Китая.
14.00 Новости (с субтитрами).
15.20 Д/ф "Светит незнакомая звезда". К юбилею Александры Пахмутовой. [12+]
18.00 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.30, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.00 "Что? Где? Когда?" Осенняя серия игр. [16+]
0.20 Д/ф "Олег Борисов. "Запомните меня таким..." [12+]
1.20 Х/ф "По главной улице с оркестром". [12+]
3.10 Про любовь. [16+]
3.55 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России. Суббота. [12+]
08.15 По секрету всему свету. [12+]
8.40 Местное время. Суббота. [12+]
09.20 Пятеро на одного. [12+]
10.10 Сто к одному. [12+]
11.00 Вести.
11.20 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.40 "Юмор! Юмор! Юмор!.." [16+]
13.50 Х/ф "Тень". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Нет жизни без тебя". [12+]
01.00 Х/ф "Подмена". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 Ты можешь! [12+]**
**9.15 Посмотрим... [12+]**
**10.00 Байтус. [6+]**
**10.15 Сыйырсык. [0+]**
**10.30 "Тамыр селтәре". [0+]**
**11.00 Күстәнәс. [12+]**
**11.30 Бай баҡса. [12+]**
**12.00 "Аҫылташ". [6+]**
**12.30 Ете егет. [12+]**
**13.15 Земляки. [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Торжественный вечер, посвященный к 95-летию санатория "Красноусольск". [12+]**
**18.15 Инцидент-репортаж. [12+]**
**19.00 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.45 Сәңгелдәк. [0+]**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 Ради добра. [6+]**
**20.30 "Байыҡ-2019". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 1.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры-2019". [12+]**
**0.00 Х/ф "Клад". [6+]**
**2.30 Спектакль "Жанна, завтра будет новый день". [12+]**
**4.45 Д/ф "Млечный путь". [12+]**
**5.45 "Бай". [12+]**
**6.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**

## 10 НОЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00, 10.00 Новости.
6.10 Х/ф "Уснувший пассажир". [12+]
7.40 Часовой. [12+]
8.10 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.10, 12.20 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Х/ф "Улица полна неожиданностей". [0+]
15.25 Д/ф Премьера. "Русский самородок". К 100-летию Михаила Калашникова. [16+]
16.30 Д/с Большая премьера. "Рюриковичи". [16+]
18.25 Большой праздничный концерт.
21.00 Время.
22.00 Большая игра. [16+]
23.45 Х/ф "Аритмия". [18+]
2.00 На самом деле. [16+]
3.00 Про любовь. [16+]
3.45 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

04.40 Сам себе режиссёр. [12+]
05.20 Х/ф "Родная кровиночка". [12+]
07.20 Семейные каникулы. [12+]
07.30, 04.05 "Смехопанорама" Евгения Петросяна. [12+]
08.00 Утренняя почта. [12+]
08.40 Местное время. Воскресенье.
09.20 Когда все дома с Тимуром Кизяковым. [12+]
10.10 Сто к одному. [12+]
11.00 "Аншлаг и Компания". [16+]
13.00 Большой юбилейный концерт Александры Пахмутовой.
16.00 Х/ф "Просто роман". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
01.00 Д/ф "Война и мир Михаила Калашникова". [12+]
02.00 Х/ф "Красавица и Чудовище". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТек?!" [6+]**
**10.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 Гора новостей. [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Дорога к храму. [0+]**
**16.30, 5.30 Историческая среда. [12+]**
**17.00 Сокровище земли башкирской. [12+]**
**17.45 Д/ф "Монетка невесты". [6+]**
**18.15 Бизнес-обзор. [12+]**
**18.30 Полезные новости. [12+]**
**18.45 Лидеры региона. [12+]**
**19.15 Ты можешь! [12+]**
**19.45 Әлләсе... [12+]**
**20.30 Теге өсәү! [12+]**
**21.00, 22.30 Республика Live. #Дома. [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**22.45 "Красная кнопка". [16+]**
**23.30 "Байыҡ-2019". [12+]**
**0.30, 4.00 Х/ф "Не свадебное путешествие". [12+]**
**2.00 Спектакль "Последние". [12+]**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Ноябрь (Рабиғел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 4 (7) дүшәмбе | 6:56 | 8:26 | 13:30 | 16:02 | 17:32 | 19:02 |
| 5 (8) шишәмбе | 6:58 | 8:28 | 13:30 | 16:00 | 17:30 | 19:00 |
| 6 (9) шаршамбы | 7:00 | 8:30 | 13:30 | 15:58 | 17:28 | 18:58 |
| 7 (10) кесе йома | 7:02 | 8:32 | 13:30 | 15:56 | 17:26 | 18:56 |
| 8 (11) йома | 7:04 | 8:34 | 13:30 | 15:54 | 17:24 | 18:54 |
| 9 (12) шәмбе | 7:06 | 8:36 | 13:30 | 15:53 | 17:23 | 18:53 |
| 10 (13) йәкшәмбе | 7:08 | 8:38 | 13:30 | 15:51 | 17:21 | 18:51 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

✓ *Сәләмәтлегегеҙ ҡәҙерле булһа бөтөнләй пакетлы сәй эсеүҙе туҡтатығыҙ. Япраҡлы сәйҙең файҙаһы ла күберәк, сәйе лә тәмлерәк. Ә инде йәйгеһен ялҡауланмай ғына үлән сәйҙәре әҙерләһәгеҙ - бигерәк тә яҡшы!*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# СОЮЗДАШ РЕСПУБЛИКАЛАРҘЫ БЕЛӘҺЕҢМЕ?




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**43-сө һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Йөрәк. Башҡорт. Төрөмбәт. Тулҡын. Серге. Көрт. Һалдат. Юрға. Өсмөйөш. Банк. Ат. Дага. Алты. Аршын. Лакей. Килт. Рим. Йөшен. Ыҙан. Әрме.

**Вертикаль буйынса:** Саҡматаш. Терегөмөш. Есем. ДНК. Бөрө. Илайым. Мәке. Өршәк. Алтай. Юша. Әшнә. Татар. Клёш. Кәрлә. Ерем. Туҡһанбай. Өн. Ля. Батыр. Нефтекама.

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 ноябрь "Әҙләнем, бәғерем, һине..."** (Т. Миңнуллин), мелодрама. 12+

**6 ноябрь "Һөйәһеңме - һөймәйһеңме..."** (Ф. Буляков), трагикомедия. 12+

**7 ноябрь "Әлифбанан бер себеш"** (А. Кивиряхк), монодрама. 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**2 ноябрь "Сказка о царе Салтане"** (А. Пушкин). 0+
**3 ноябрь "Красная шапочка"** (Ш. Перро). 0+
**4 ноябрь "Муха-цокотуха"** (И. Романов). 0+
Бөтә спектаклдәрҙең башланыу ваҡыты: 12.00 һәм 14.00

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**2 ноябрь** Башҡортостандың халыҡ артисы **Азамат Тимеровтың юбилей концерты**. Башлана 18.00 6+

**7 ноябрь** Башҡортостандың атҡаҙанған артисы **Резида Әминеваның юбилей кисәһе**. Башлана 19.00 6+

БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!



**Башҡорттар өсөн сәй - аш-һыуҙың төп атрибуттарының береһе. Хатта, ҡунаҡтан ҡайтҡан башҡорт өйөнә инеү менән иң элек сәй ҡуя, тиҙәр. Ҡытайҙар кеүек, башҡорттарҙың да үҙенә генә хас сәйләү тәртибе бар. Ҡыҫҡаһы, башҡорт сәй эсмәһә - уның өсөн эш тә, тормош та туҡталып ҡала.**

## ПАКЕТЛЫ СӘЙ ЭСӘҺЕҢМЕ?

Был эсемлекте һөйәктәр, тештәр, ауыҙ ҡуҙнаһы һәм тотош организм өсөн файҙалы, тиҙәр. Ләкин күптәребеҙ япраҡлы сәйҙе бешереп торорға ялҡауы килеп, пакеттағы сәйҙе генә ҡуллана. Тиҙ ҙә, тәмле лә, әммә... Сәй пакеттарында организмға эләгеп, уны бысратыусы миллиардлаған микропластик киҫәксәләр бар икән!

Быны Канада ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәр ҙә раҫлай. Улар пакетлы сәй етештереүселәрҙең күбеһе һуңғы ваҡытта сәйҙе ҡағыҙ пакеттарҙа сығарыуҙы туҡтатып, пластикка күсеүенә иғтибар итә. Бындай сәйҙәрҙе таныуы бик еңел - пакеттар селтәрле һәм ныҡлы, ҡағыҙ пакеттар кеүек тиҙ генә йыртылып бармай. Ғалимдар Канаданың Монреаль ҡалаһы магазиндары буйлап йөрөп, пакетлы сәйҙең дүрт төрөн һатып ала һәм уларҙы лабораторияла асып, сәйҙәрен ҡойоп, пакеттарҙы 95 градуслы ҡайнар һыуға һала. Биш минуттан һуң шыйыҡсаны микроскоп аҫтында тикшерә һәм унда бихисап микроскопик пластик киҫәксәләр йөҙөп йөрөгәнен күреп, аптырашта ҡалалар.

Аныҡлап әйткәндә, ғалимдар ике төр микропластикты асыҡлай. Һәр сынаяҡта улар 100 нанометрҙан саҡ ҡына ҙурыраҡ дәүмәлле яҡынса 11,6 миллиард микропластик киҫәксәһен күрә. Шулай уҡ сынаяҡтарҙа 100 нанометрҙан бәләкәйерәк 3,1 миллиард нанопластик булыуы асыҡлана.

Тимәк, пакетлы сәй эсеп, беҙ, ғәмәлдә, пластик суп-сарын йотабыҙ. Шуға күрә, хатта бәләкәй балаларҙың ҡанында ла микропластиктың ҙур күләмдә булыуына аптырайһы түгел.

Әлегә ғалимдар пакетлы сәйҙәге пластиктың организмға нисек йоғонто яһауын белмәй. Уның тере организмға йоғонтоһо бары тик һыу бөрсәләре - бәләкәй генә ҡыҫалаға оҡшаған йән эйәләрендә тикшерелә. Улар бик йыш экологик тәжрибәләр үткәргәндә файҙаланыла. Һыу бөрсәләрен һыуға һалып, улар пластик киҫәксәләр менән туйынғас, ғалимдар был йән эйәләренең үҙ-үҙҙәрен тотоуында сәйерлек күҙәтә. Мәҫәлән, уларҙың ҡайһы берҙәре һөлдәһен формалаштыра алмай һәм тиҙ үҫә башлай. Шулай уҡ әҙәттәге һыу бөрсәләренә ҡарағанда, тәжрибәлә ҡатнашыусыларҙың алыҫҡараҡ йөҙөүе асыҡланған. Әммә әлегә кеше организмына микропластиктың ниндәй йоғонто яһауы билдәле түгел, һәр хәлдә, файҙа булмаясаҡ.

Әйткәндәй, күптән түгел Scientific American баҫмаһы синтетик киҫәксәләрҙең кеше организмына зыяны хаҡында яҙҙы. Мәҡәләлә күҙәнәктәрҙең үсеше һәм үрсеүе туҡталыуы һөҙөмтәһендә эске ағзаларҙың зыян күреүе тураһында һүҙ бара. Шулай уҡ микроскопик киҫәксәләр хәүефле химик матдәләр, мәҫәлән, суп үләндәре һәм ҡоroткостарға ҡаршы ҡулланылған пестицидтар бүлеп сығара. Электән был матдәләр организмға эләкһә, кешенең бауыр эшмәкәрлеге боҙолоуы мәғлүм.

Ниндәй һығымта яһарға мөмкин? Һәр ваҡыт ниндәй сәй һатып алыуығыҙға иғтибар итегеҙ. Әгәр ялҡауығыҙ килмәһә һәм сәләмәтлегегеҙ ҡәҙерле булһа, бөтөнләй пакетлы сәй эсеүҙе туҡтатығыҙ. Япраҡлы сәйҙең файҙаһы ла күберәк, сәйе лә тәмлерәк. Ә инде йәйгеһен ялҡауланмай ғына үлән сәйҙәре әҙерләһәгеҙ - бигерәк тә яҡшы!

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!



# ЕЙӘНСУРАНЫҢ...

## Аҡъегете менән Аҡйондоҙо кем?

**Быйылғы көҙ яҙғы хистәргә бай булды. Яҙғы хистәр - йәшлек дәрте, йәшлек илһамы менән тулы шиғриәт, сәхнә тамашалары... Быға сәбәп иткән хәл - Мостай Кәримдең тыуыуына йөҙ йыл тулыу уңайынан республикала гөрләп үткән ижади әҙәби-музыкаль, хәтер-хөрмәт кисәләре.**

Ейәнсура районы үҙәге Иҫәнғол ауылы түрендә генә балҡып ултырған йорт - башҡорт гимназияһы бинаһы. Бынан ике тиҫтәләп йыл әүәл уны ойоштороусы һәм асыусы Мәрйәм апай Бураҡаеваның һөйөнсөләүе менән был мәктәпкә бөтә республика йәмәғәтселеге ҡыуанғайны. Унда бирелгән рухи тәрбиә һөҙөмтәһендә туған башҡорт теле һәм тыуған яҡ тарихын, ер-һыу байлығын хәстәрләп өйрәнеүсе йәш быуын үҫер, тигән яҡты өмөттәр менән сәләмләне уны республика. Быйылғы көҙ йәнә ошо уҡыу йортона юл төштө. Әйтергә кәрәк, тәртип ҡапҡа төбөнән башлана. Йыйнаҡлыҡ, таҙалыҡ, аулаҡ ҡына туған йорт һулышы һиҙелеп тора. Шулай ҙа райондан ике йөҙ илле уҡыусы йыйылып уҡыған белем усағында заманса спорт майҙаны, башланғыс синыфтарҙа уҡығандарға уйын майҙансыҡтары булмауын белгәс, бер аҙ аптырап ҡалынды. Ата-әсәһенән айырылып, район үҙәгендә аҙнаның биш көнөн үткәрергә мәжбүр булған балаларға саф һауала йөрөү ҙә, спорт менән дуҫлашыу ҙа бик мөһим бит, тигән һығымта яһап ҡуйҙыҡ.

- Башҡорт гимназияһында бөгөн "Аҡъегет менән Аҡйондоҙ" кисәһе үтә, - тип ҡаршыланы беҙҙе Иҫәнғол балалар сәнғәт мәктәбенән килеп, Башҡорт гимназияһында театр-студия етәксеһе булып эшләүсе Радмир Рәил улы Дәүләтбәков. Радмир уҡыусыларға туған телдә шиғыр һөйләү, сәхнә уйыны серҙәренә төшөндөрөү эшен һәр баланың үҙ булмышынан, үҙ эске тауышынан башлаған: "Яһалма ҡыланыу, ҡалыплашҡан штамптар менән эш итеү - беҙҙеңсә түгел, һәр театр-студияға йөрөүсе егет һәм ҡыҙ беренсе нәүбәттә үҙ тауышы, үҙ аҡылы һәм зиһененә таянып, сәхнәгә, кеше алдына сығырлыҡ, матур телмәр тоторлоҡ ҡағиҙәрҙе өйрәнә. Мин уларҙың үҙ көсөнә ышанған заманса йәштәр булып нығыныуын, гимназия тамамлағас та, үҙ фекерен әйтә, үҙ фекерен яҡлай белерлек шәхестәр булып китеүен күргем килә", - ти студия етәксеһе.

Гимназияның тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары Рәмилә Айытбай ҡыҙы Солтанова менән өлкән тәрбиәсе Альбина Мөхәррәм ҡыҙы Уразаева ыҡсым ғына тамаша залына төрлө синыфтарҙа уҡыған балаларҙы йыйған. Иң тәүҙә һигеҙенсе синыф малайҙарынан торған йыр төркөмө сығыш яһаны. Гимназияның музыка уҡытыусыһы Фәнүр Ғайса улы Тоҡомбәтов уларға "Әссәләмәғәләйкүм" йырын өйрәткән. Ейәнсураның фәйләсүф шағиры Ғилман Ишкинин һүҙҙәре һәм көйө бик аһәңле яңғыраны. Ғөмүмән, был йырҙы Ейәнсура яғының халыҡ ижады, рухи ҡаҙанышы, тип әйтергә була. Тамаша залында гимназияның башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары ла бар, улар һәр уҡыусыһының дөрөҫ дикцияһы, тасуири уҡыуы өсөн көйәрмән булып ултыра.

Мостай Кәримдең шиғырҙарын ятҡа һөйләү буйынса беренсе турҙа Ильяс Ваһапов, Аслан Дәминев, Камил Рахманғолов, Айгиз Арыҫланов, Фәҙис Хәмиҙуллин, Ильяс Йәнбәков бик матур сығыш яһаны. Улар шағирҙың һуғыш тураһындағы, фәлсәфәүи лирикаһын һайлаған. Артабан бер-бер артлы ҡыҙҙар сығыш яһай: Азалия Шәйәхмәтова, Гөлдәр Мәркәбаева, Гөлфинә Урманбәтова, Раушания Ғафарова, Гүзәлиә Ваһапова, Алтынай Ямғырова, Вәсилә Хәкимова, Айзидә Йылҡыбаева, Азалия Ишкинина, Айзилә Ғөбәйҙуллиналар өсөн Мостай Кәрим ижады бөгөн генә яҙылғандай танһыҡ һәм аңлайышлы. Улар үҙҙәренең йөрәк йылыһын, тауыш моңон ҡушып һөйләне.

Был кисәне алып барыусы һәм ойоштороусыларҙың береһе - Ейәнсура районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһының етәксеһе, гимназияның китапханасыһы Нурия Мөхтәр ҡыҙы Ҡунысбаева балаларға "Оло инәй һорауҙары"н бирә башлағас, барса бәйгеселәрҙең дә дәррәү ҡул күтәргәнен күреп, ифрат шатландыҡ. "Зирәклек булған ерҙә батырлыҡ та, матурлыҡ та булыр", тип, Шағирҙың фатиха һүҙҙәрен алға алып, бер тауыштан кисәнең төп геройҙары билдәләнде. Улар быйылғы көҙҙөң Аҡъегете менән Аҡйондоҙо - Айгиз Арыҫланов менән Гүзәлиә Ваһаповалар булды.

**Сәрүәр СУРИНА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҠШЫ ЕГЕТ...

## ил ғәйебен асмаҫ

Эсмәм тигән ҡоҙоҡтан өс әйләнеп эсерһең, ҡайтмам тигән иленә алйыға та ҡайтырһың.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аҡсаһы аҙ булып та күңел күтәренкелегендә йәшәгән кеше - бәхетле, аҡсаһы күп булып та йән тыныслығы тапмағандар - бәхетһеҙ.

**(Демокрит).**

Тәбиғәттән берәү ҙә түбән йә бейек булмай, бары тик хеҙмәте генә кешене түбән йә бейек итә.

**(Һинд халыҡ мәҡәле).**

Ахмаҡтың тормошо ҡурҡыу менән тулы, сөнки ул бер эшен дә бөгөн эшләмәй, ә барыһын да иртәгәгә ҡалдыра.

**(Кесе Сенека).**

Әгәр ҙә бәхет йорто төҙөргә тура килһә, ундағы иң ҙур бүлмәне көтөү өсөн тәғәйенләргә тура килер ине.

**(Ж. Ренар).**

Ғаилә бәхетенә һуҡыр ҡатын менән һаңғырау ир генә өлгәшә ала, тип әйткән кеше бик аҡыллы булғандыр.

**(М. Монтень).**

Һин эҙләгән бәхет һинең менән килгән күләгәгә оҡшаш: артынан сапһаң - тоттормай, ҡасһаң - артыңдан ҡыуа төшә.

**(Ғәрәп халыҡ мәҡәле).**

Беҙҙең бәхетһеҙлектәрҙең сере шунда: бәхетлебеҙме, юҡмы, тип уйланырға ваҡытыбыҙ күп.

**(Б. Шоу).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Әнәс исемле кеше үткер телле һәм шаян булыуы менән тирә-яҡта дан алған. Күптәр уның шаянлығына шаянлыҡ менән яуап биреп йә көтөлмәгән һорау биреп, уның иғтибарын яуларға тырышҡан. Аҡылға һайыраҡ һәм тәрбиәһеҙ бер егет Әнәсте аптыратмаҡсы була һәм уға: "Хөрмәтле Әнәс ағай, әйт әле, һин ҡасаныраҡ был донъяны ташлап китәсәкһең?" - тип һорай. "Ә ниңә һиңә минең үлеүем кәрәк?" - ти Әнәс. "Күптән түгел атайым беҙҙе ташлап, теге донъяға күсте, - ти егет. - Мин уға хат яҙҙым, хатымда һеҙгә, шуҡлығы менән танылған Әнәс ағайға әлеге һорауҙы биреүем тураһында ла белгерттем. Бер рәхәтләнеп көлөп алһын әйҙә. Тик был хатты атайыма нисек тә еткерергә кәрәк бит инде. Хатты уға һеҙ алып барып еткерә алмаҫһығыҙмы икән, тигәйнем". "Һиңә ярҙам итергә бик теләр инем дә ул, - ти Әнәс. - Ләкин һиңә атайыңа хат илтер өсөн икенсе кешене ялларға тура килер. Сөнки мин бик гонаһлымын һәм Хоҙай Тәғәлә мине туп-тура тамуҡҡа ебәрәсәк. Ә бына һинең кеүек "үткер телле" улды тыуҙырған һәм тәрбиәләгән атайыңды Хоҙай, моғайын, ожмахҡа ебәргәндер, сөнки ул бит һинең ҡылыҡтарыңа оҙаҡ ваҡыт түҙемлек күрһәткән..."**

1 582218 911006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА, Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ, Сәрүәр СУРИНА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
1 ноябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3707
Заказ - 2178/11